РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫНЫҢ МӘҒАРИФ МИНИСТРЛЫҒЫ

ФЕДЕРАЛЬ ДӘҮЛӘТ БЮДЖЕТ ЮҒАРЫ БЕЛЕМ БИРЕҮ
МӘҒАРИФ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ

“М. АҠМУЛЛА ИС.

БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ ПЕДАГОГИЯ УНИВЕРСИТЕТЫ”

БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ГРАЖДАНЛЫҠ
ЙӘМҒИӘТЕНӘ ЯРҘАМ ФОНДЫ

# ТЫУҒАН ЯҒЫМ – ӘБЙӘЛИЛ

Әбйәлил районының балалар баҡсаларында үткәрелгән
тәрбиәүи сараларҙың эшкәртмәләре



Өфө – 2021

УДК: 811.511:373.24
ББК: 81.632.2+74.102
Т 93

**Рецензенттар:**

филология фәндәре кандидаты, доцент Ғ.Ғ. Ғәлина (М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Өфө ҡ.); педагогика фәндәре кандидаты, доцент С.А. Таһирова (М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Өфө ҡ.); Г.С. Зәйетҡолова, балалар баҡсаһы мөдире (277-се балалар баҡсаһы муниципаль бюджет мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы, Өфө ҡ.); Г.Х. Хөснитдинова, өлкән тәрбиәсе ("Жәлил Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназия" МАДББУ, Стәрлетамаҡ ҡ.)

Т 93 Дәүләтҡолова Г.Ш., Хөсәйенова Л.М. Тыуған яғым – Әбйәлил: Әбйәлил районының балалар баҡсаларында үткәрелгән тәрбиәүи сараларҙың эшкәртмәләре: уҡытыу-методик ҡулланма. – Өфө: М.Аҡмулла ис. БДПУ, 2021. – 80 бит.

“Остаз” балалар баҡсаһы тәрбиәсеһенең педагогик оҫтаханаһы” проекты сиктәрендә әҙерләнгән “Тыуған яғым – Әбйәлил” тәрбиәүи саралар эшкәртәмәләре йыйынтығы балалар баҡсаларының төрлө төркөмдәрендә башҡорт телен, мәҙәниәтен, фольклорын өйрәтеү маҡсатында ерле материалға таянып, балаларҙың туған телдә аралашыу телмәрен үҫтереү, фольклор өлгөләре менән таныштырыу, ерле материал аша тыуған ергә һөйөү тәрбиәләүҙе үҙ эсенә ала.

Эшкәртмәләр балалар баҡсалары тәрбиәселәренә, башланғыс класс уҡытыусыларына, “Мәктәпкәсә белем биреү”, “Башланғыс кластар” йүнәлештәрендә уҡыусы студенттарға, ата-әсәләргә тәғәйенләнә.

© М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, 2021

© Башҡортостан Республикаһының Граждандлыҡ йәмғиәтенә ярҙам фонды, 2021

## Баш һүҙ

М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты ғалимдары Башҡортостан Республикаһының граждանлыҡ йәмғиәтенә ярҙам фонды тарафынан тормошҡа ашырылған Башҡортостан Республикаһы Башлығының гранты – “Остаз” балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе оҫтаханаһы” проекты сиктәрендә башҡорт теленең өс диалектындағы балалар баҡсалары тәрбиәселәре менән эш алып барҙы.

Тәҡдим ителгән уҡытыу-методик ҡулланмала көнсығыш диалект вәкилдәре булған Әбйәлил районы балалар баҡсалары тәрбиәселәре үткәргән тәрбиәүи сараларҙың эшкәртмәләре тупланды. Был сараларҙың төп маҡсаты: башҡорт телен балалар баҡсаларынан уҡ урындағы һөйләш үҙенсәлектәренә таянып өйрәтеү, диалекттағы һәм әҙәби телдәге башҡорт һүҙҙәре менән балаларҙың телмәрен байытыу, ата-бабаларыбыҙ белгән йола-кәсептәр менән таныштырыу, балаларға уларға бәләкәйҙән таныш ер-һыу атамаларының легенда һәм риүәйәттәре тураһында һөйләү һәм тыуған яҡҡа һөйөү тәрбиәләү. Апробация үткән был эшкәртәмәләрҙе Башҡортостаныбыҙҙың башҡа балалар баҡсаларында үткәрергә тәҡдим итәбеҙ.

Уҡытыу-методик ҡулланманы баҫмаға әҙерләгән төркөм исеменән, Әбйәлил районы балалар баҡсалары тәрбиәселәренә үҙҙәренең эш тәжрибәһе менән уртаҡлашҡандары өсөн оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

***Баймөхәмәтова Л.Р.,***
*Аҫҡар ауылы “Сулпылар” балалар баҡсаһы*

## Орсоҡ өмәһе

(урта төркөм өсөн)

Бурыстар:

1. Тыуған илгә, ергә ҡарата һөйөү булдырыу, Ватан менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү;
2. Балаларҙы башҡорт фольклоры менән таныштырыу;
3. Балаларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү.

**Сараның барышы**

*Һарыҡ йөнөнән бәйләнгән кейемдәрҙән күргәҙмә әҙерләнә (ойоҡ, бейәләй, шарф, кофталар, муйынса).*

*Кейеҙ түшәктәр, һарыҡ йөнөнән һуғылған түшәктәр.*

*Балалар “өйҙә” үҙҙәренең өләсәләре менән йыйылғандар.*

Тәрбиәсе: Һаумыһығыҙ, балалар, ағинәйҙәр, өләсәйҙәр! Бөгөн беҙҙә хеҙмәт байрамы – Орсоҡ өмәһе. Ул беҙҙең яҡтарҙа көҙөн үткәрелә. Өләсәйҙәр ҡыҙҙарҙы һөнәргә өйрәткән.

1-се малай:
Көҙгө байлыҡ, көҙгө муллыҡ,
Ауылда орсоҡ өмәһе,
Йәше-ҡарты, бала-саға –
Шау-гөр килә һәммәһе.

1-се ҡыҙ (*ҡулына орсоҡ тотҡан*):
Беҙҙә орсоҡ өмәһе,
Ҡулдарҙа орсоҡ ҡына.
Орсоҡ өмәһенә килә
Гел уңған ҡыҙҙар ғына.

2-се малай:
Ҡыҙҙар йыйылған өйгә,
Ҡыҙҙар килгән өмәгә,
Нисек итеп йөн иләргә
Инәйҙәрҙән күрергә.

*Малайҙар елкәләренә һарыҡтар һалып инәләр.*

3-сө малай: Ҡайҙа һарыҡ ҡырҡалар?

2-се ҡыҙ: Бында һарыҡ ҡырҡалар!

3-сө ҡыҙ: Һарыҡты тотоп биргән өсөн беҙҙән һеҙгә – бейәләй. (*Бейәләйҙәр таратып бирәләр*)

Тәрбиәсе: Йөнөн ҡырҡырҙан алда һарыҡҡа теләктәр теләгәндәр, йөнөнә таҫма бәйләгәндәр. Һеҙ ниндәй теләк әйтерһегеҙ, балалар?

(*Һәр баланың ҡулында төрлө төҫлө таҫмалар, теләк әйтеп "һарыҡтың" йөнөнә бәйләйҙәр*).

4-се малай: Йөнөң йомшаҡ булһын.

4-се ҡыҙ: Йөнөң оҙон булһын.

5-се малай: Йөнөң ялтырап торһон.

5-се ҡыҙ: Йөнөң сүп-сарһыҙ булһын.

6-сы малай: Йөнөң йылы булһын.

6-сы ҡыҙ: Йөнөң һәйбәт ҡалҡһын.

Тәрбиәсе: Афарин, балалар! Малайҙар, хәҙер йөнөн ҡырҡырға алып китһәгеҙ ҙә була. Ә беҙ уйындар уйнайыҡ!

*Малайҙар, "һарыҡтарҙы" күтәреп, йөнөн ҡырҡырға алып китәләр.*

*Наза уйыны*

Колхоз аттары ял итә
Колхоз һарайҙарында.
Рәхәтләнеп беҙ эшләйбеҙ
Колхоз баҫыуҙарында.
Наза, Наза, Наза – матур ҡыҙ бала,
Наза матур, ударница,
Һәр эштә алда бара.
Урал тауҙары бейек,
Мендем аҡ күлдәк кейеп.
Колхоздарҙа беҙ эшләйбеҙ
Үҙебеҙҙеке, тиеп.
Наза, Наза, Наза – матур ҡыҙ бала,
Наза матур, ударница,
Һәр эштә алда бара.

*Ҡырҡылған йөндө алып инәләр.*

Тәрбиәсе: Ҡыҙҙар, йөн әҙер! Эшкә тотонайыҡ! Инәйҙәрҙән эшкә өйрәнәйек!

*Ҡыҙҙар, йөндө бүлешеп алып, ағинәйҙәр эргәһенә йөн иләргә ултыралар. Һәр береһенең алдында йөн иләй торған станок, ҡайһы бер балалар әҙер ептәрҙе уратып ултыралар.*

7-се ҡыҙ:
Йөн иләйбеҙ, йөн иләйбеҙ,
Ебебеҙ бер ырамай.
Орсоҡтар бейеп торғанда,
Түҙеп булмай йырламай.
8-се ҡыҙ:
Йөн иләйбеҙ, йөн иләйбеҙ,
Эшебеҙ бер ырамай.
Әнисәгә ҡоҙа килгән,
Мине бер кем һорамай.
9-сы ҡыҙ:
Йөн иләйбеҙ, йөн иләйбеҙ,
Ептәр нәҙек булмаһын.
Беҙҙең ошолай ултырыуҙар
Үкенескә булмаһын.
10-сы ҡыҙ:
Иңдәреңдә – мамыҡ шәлең,
Шәлеңдең сәсәге юҡ,
Үтте инде көндәр, төндәр,
Кире киләсәге юҡ.
Өләсәй: Балалар, иләнгән йөндән нимәләр бәйләргә була?
*Балаларҙың яуабы: бейәләй, ойоҡ, шарф, муйынса һ.б.*

Өләсәй: Элек иләнгән һәм буялған йөндән балаҫ һуҡҡандар, шәл һуҡҡандар. Иләнмәгән, яңы ҡырҡылған йөндән кейеҙ баҫҡандар.

Тәрбиәсе: Рәхмәт һеҙгә, ағинәйҙәр! Рәхмәт һеҙгә, өләсәйҙәр! Ҡыҙҙарға һөнәр өйрәтеү – борондан ҡалған йола. Беҙҙең ҡыҙҙар эшлекле, тәрбиәле булып үҫер.

Өләсәй: Һай, уңған ҡыҙҙар! Бөтә йөн иләнеп тә бөттө. Әйҙәгеҙ, өмәне тамамлап, сәй табынына рәхим итегеҙ, балалар!

**_Баймөхәмәтова Л.Р.,_**
*Асҡар ауылы “Сулпылар” балалар баҡсаһының*
*педагог-психологы яҙып алған*

## Аждаһалар иле
(легенда)

Борон-борон заманда был тирә күлдәр иле булған. Ҡоръятмаҫ та, башҡа тауҙар ҙа булмаған. Кешеләр рәхәтләнеп күлдәр, йылғалар

буйында урынлашҡандар. Һәр бер күлдең эйәһе – төрлө төҫтә ялтырап торған Аждаһалар булған.

Аждаһалар менән кешеләр бик дуҫ йәшәгәндәр, бер-береһенә ярҙам иткәндәр, бер-береһен хөрмәт итеп торғандар. Аждаһалар, күл буйлап уйнап, шаяра башлаһалар, ер өҫтөнә ямғыр яуған. Ә инде һауала осоп өйөрөлһәләр, көндәр йылынып киткән, күпереп бесән үҫкән, мал-тыуар үрсегән, ағастар йәшәреп матурайып киткән. Кешеләр тыныс, етеш, мул тормошта йәшәгән.

Бына бер ваҡыт был тирәгә Ҡара көс һөжүм итә башалаған, ти. Ул Яйыҡ йылғаһы аръяғынан килгән. Ҡара көс, ҡап-ҡара көслө аттарҙа ҡойон һымаҡ килеп, ҡара уҡтар менән ата башлаған, ти. Бөтә нәмәне яндырып, малдарҙы өркөтөп, ир-егеттәрҙе үлтереп, ҡатын-ҡыҙҙарҙы, бала-сағаны ҡол итеп үҙ яғына алып киткән. Уның артынан бер нәмә лә ҡалмаған.

Шул Ҡара көс шашып беҙҙең тыныс һәм матур яҡҡа ла килеп еткән. Бында йәшәгән кешеләр Аждаһалар менән бергә Ҡара көскә ҡаршы торған. Бер көн һуғышҡандар, ике көн һуғышҡандар, өсөнсө көндө Ҡара көстө артҡа сигендергәндәр. Ләкин ул бирешергә теләмәгән, көс-хәл йыйып, тағы ла хөжүмгә әҙерләнгән, ти.

Күп кешеләр үлгән был һуғышта, күп Аждаһалар ҙа баш һалған. Күл буйҙарында уларға дошмандан йәшенергә урын да булмаған бит. Быны күреп, Баш Аждаһа бер күлдең һыуын бөтөргәнсе эскән дә, тау һымаҡ өйөлөп ятҡан үлгән кешеләр, үлгән аждаһалар өҫтөнә бөрккән, ти. Был урындарҙа бәләкәй тауҙар барлыҡҡа килгән. Уларға кешеләр “Бәләкәс Ҡоръятмаҫ” тип исем биргәндәр, “был тауҙарҙа ҡор ҙа ятмаҫ” тигәндәр. Тауҙың башына менеп, ир-егеттәр һәм Аждаһалар Ҡара көстөң һөжүмгә килгәнен көтөп торғандар. Ә ҡатын-ҡыҙҙар һәм бала-сағалар тауҙар аратында йәшенә алғандар, ти.

Бына Ҡара көс, хәл йыйып, тағы ла кешеләргә һәм аждаһаларға яу менән килгән. Йылға булып ҡан аҡҡан, батыр егеттәр яуҙа баш һалған, иң көслө, иң матур аждаһалар кешеләр менән бер рәттән һәләк булғандар. Шулай ҙа Ҡара көстө артҡа сигендергәндәр. Ләкин ул һаман да бирешергә уйламаған, көсөн тағы ла арттыра алған.

Баш Аждаһа тағы ла күлдәрҙе эсеп, тау булып өйөлөп ятҡан батырҙарҙың һәм аждаһаларҙың кәүҙәләре өҫтөнә бөркkән. Был ерҙәргә тағы ла бейек тауҙар барлыҡҡа килгән. Уларҙы халыҡ “Өлкән Ҡоръятмаҫ” тип атаған.

Ҡаты һуғыштан ҡалған кешеләр, шул тау башына менеп, Ҡара көстөң тағы ла йыйылғанын күргәндәр. Ләкин уларҙың эргәләрендә көслө, матур Аждаһалар булмаған. Был һуғыштан бер-бөртөк Аждаһа тороп ҡалған – Баш Аждаһа. Тау башында торған башҡорттарҙың рухи көсө ныҡ булған, үҙ ерҙәренә Ҡара көстө индергеләре килмәгән. Ә Баш Аждаһа үҙенең иптәштәре юҡлығын, күлдәренең кәмегәнен күреп баш эйгән. Тирә яғында кешеләр ҙә кәмегән, ә Ҡара көс күбәйгәндән-күбәйгән. Баш Аждаһа нисек Ҡара көстө еңергә, тип оҙаҡ уйлаған. Шунан кешеләрҙе саҡырып алып, ҡара май алып килеп үҙенең өҫтөнә ҡойҙортҡан. Баш Аждаһаның, оҙонлоғо утыҙ саҡрым, киңлеге ун саҡрым булған. Кешеләр ҡара майҙы өс көн, өс төн ташып ҡойғандар.

Тау аҫтында торған Ҡара көс һөжүм башлаған. Шул ваҡыт Баш Аждаһа кешеләргә үҙенең өҫтөнә ут төртөргә ҡушҡан. Кешеләр хайран ҡалғандар: нисек инде бер бөртөк ҡалған Аждаһаға ут төртмәк кәрәк. Уларҙың Аждаһаны яндырғылары килмәгән. Ләкин Баш Аждаһа үҙенә кешеләрҙән ут төрттөргән һәм утлы юл булып Ҡара көскә ташланған. Ауыҙы менән Ҡара көскә ут бөрккән, утлы ҡойроғо менән һуғып яндырған. Тотош ялҡын булып Ҡара көс араһына барып ингән Баш Аждаһа. Кемде яндырған, кемде баҫҡан. Ҡара көс: “Беҙгә ҡара үлем килде”, – тип ҡасҡан. Оло Яйыҡ йылғаһына тиклем баҫтырған Ҡара көстө Баш Аждаһа. Һуңынан Яйыҡ йылғаһына төшөп юҡ булған.

Кешеләр оҙаҡ көткәндәр Баш Аждаһаны, ләкин ул кире ҡайтмаған. Өлкән Ҡоръятмаҫ тауынан ут булып төшкән Баш Аждаһа тауҙы уйылдырып ҡалдырған, шул ерҙе Аждаһа юлы тип йөрөтәләр. Күп кешеләр төнөн һаман да көтәләр уны. Беҙҙең яҡта әле булһа: “Төнөн Баш Аждаһа шул юл буйлап күлгә һыу эсергә, һыу инергә, уйнарға төшә”, – тип һөйләйҙәр. Көндөҙ күренмәй, сөнки уның тәне тотош утлы яра, кешеләр ҡурҡыр тип, күренмәй, ти. Хәҙер тауҙарҙы кешеләр ҡыҫҡа итеп *Бәләкәй Ҡоръятмаҫ, Өлкән Ҡоръятмаҫ* тип атап йөрөтәләр.

***Баймырҙина В.Ә.,***
*Аскар ауылы балалар баксаһы тәрбиәсеһе*
*әсәһе Баймөхәмәтова Ләлә Ситдык кыҙынан яҙып алған*

**Айтуған менән Ҡырмай**
(әкиәт)

Борон бер ир менән ҡатындың оҙаҡ ҡына балалары булмай торған. Көнө-төнө теләй торғас, ай тыуған мәлдә быларҙың улдары тыуған, уға Айтуған тип исем ҡушҡандар, ти. Айтуған зирәк малай булып, йыл үҫәһен ай үҫкән, ай үҫәһен көн үҫкән.

Улдарына ун биш йәш тулыуға атаһы менән әсәһе уға ҡолон бүләк иткән, ти. Айтуған ҡолонона Ҡырмай тип исем ҡуша. Ҡырмай уның тоғро дуҫына әйләнә. Тик ҡолондо бер кемгә лә күрһәтмәй, бикләп кенә тоталар, ти. Ҡырмай шундай тыңлаусан ат булып үҫә.

Айтуғанға кәләш алыр ваҡыт та еткән, ти. Ул үҙенә иш итеп кәләшкә Ай исемле ҡыҙҙы эҙләгән.

Бер ваҡыт ул күрше ауылда күп ҡыҙҙарҙың йырлап, бейеп йөрөгәндәрен күрә лә яндарына килә. Араларында бер ҡыҙ башҡаларынан оҫта баҫып бейеүе, ихлас көлөүе менән айырылып тора, ти. Бик килешле күлдәге, камзулының тәңкәләре күҙҙең яуын алып тора, ти. Сәсе бик оҙон, ә түбәһенә көмөш ярым айлы тараҡ ҡаҙалған. Егеткә был ҡыҙ бик оҡшаны, ти.

– Һаумы, һылыу! Минең исемем Айтуған була, ә һинеке нисек? – тип һорай һала.

– Айбикә, – тип яуап бирә ҡыҙ.

– Айбикә! Һин бит мин эҙләгән ҡыҙ! – тип ҡысҡырып ебәрә егет шатланып.

Шул көндән алып Айтуған һәр кис күрше ауылға йөрөй башлай. Ул, атын урманда ҡалдырып, ҡыҙ янына йәйәү килә, ти.

Кисен Айбикәнең йөҙөнән нурҙар һибелә, ә түбәһендәге тарағы Айҙан да яҡтыраҡ янып тора, ти. Айтуғандың был тараҡты бик тә тотоп ҡарағыһы килгән, ти, әммә Айбикә:

– Юҡ, тарағыма ҡағыла күрмә! Был – минең серем, – тип егетте тыйып ҡуйған, ти.

Бер көн Айбикә:

– Беҙҙең ауылдар араһы йыраҡ ҡына, ә һин йәйәү килеп арығанға оҡшамағанһың. Нимә менән киләһең? – тип һораған.

– Атым Ҡырмай менән, – тигән ти егет.

– Ҡайҙа һуң атың? – тип һорай ҡыҙ.

– Урманда, үлән ашай.

– Миңә күрһәт әле атыңды.

– Мин уны бер кемгә лә күрһәтмәйем, күҙ тейә, был – минең серем, – тип яуаплай егет.

Айтуған, ҡыҙ менән хушлашып, ҡайтырға аты янына китә. Айбикәнең был серле атты бик күргеһе килә. Ул, әхирәттәрен йыйып, йәшенеп кенә егет артынан эйәрә.

Айтуған Ҡырмай янына килеп:

– Тор инде, ҡайтабыҙ! – тип өндәшеүе була, ат, ике яҡ һыртынан ҡанаттарын йәйеп, осоп китәм тигәндә генә, ҡыҙҙар һоҡланыуҙан ҡысҡырып ебәргән, ти. Ат шунда уҡ ергә ауып китә лә йән бирә. Атҡа ҡыҙҙарҙың күҙе тейә.

Айтуған оло ҡайғыға төшә. Ҡыҙҙар тиҙ генә ҡасышып бөтәләр, Айбикә генә тороп ҡала. Ул түбәһендәге тарағын алып, Ҡырмайҙың ялына ҡаҙай. Ҡапыл ел-дауыл күтәрелә, ат күҙен асып аяғына ла баҫты, ти. Егет шатлығынан атын ҡосаҡлап, Айбикәгә ҡараһа, ҡыҙ торған ерендә ҡатҡан да ҡалған, ти. Көмөш ярым ай тарағы ҡыҙҙың йәне булған икән. Егет ни эшләргә лә белмәй, күккә ҡарап, Айҙан ярҙам һорай.

– Айбикә – минең берҙән-бер ҡыҙым ине, Ер йөҙөнә үҙеңдең ишеңде тап, тип ебәргәйнем. Мәңгегә һинең менән Ерҙә булырға ете көн һәм ете төн генә ҡалғайны. Харап булды балаҡайым! – тип әрнегән Ай.

– Эй, Ай! Кәңәшеңде бир: Айбикәне нисек ҡотҡарайым? – тигән егет.

– Ете диңгеҙ артындағы Ҡаф тауы аҫтында Тере шишмә аға, шул һыуҙа ҡойондорорға кәрәк. Әгәр ҙә ете көн, ете төн эсендә алып барып өлгөрһәң, Айбикә мәңгегә һинең янда ҡалыр. Ашыҡ, Айтуған! Тик ул шишмәне өс башлы дейеү һаҡлай. Уны тылсымлы ҡылыс менән генә еңеп була. Бына ул көмөш ҡылыс!

Айбикәне атының һыртына һалып, алһыҙ-ялһыҙ оса егет Ҡырмай менән.

Етенсе көн тигәндә улар килеп еттеләр, ти. Айтуған атынан төшөүе була, уларҙы өс башлы дейеү күреп тә ҡала. Ул ажғырып егеткә ташлана. Хатта ер тетрәп китте, ти. Айтуған ҡурҡып ҡалмай,

Айҙың тылсымлы көмөш ҡылысы менән бер-бер артлы дейеүҙең баштарын өҙә сапты, ти.

Егет таш булып ҡатҡан Айбикәне Тере шишмә һыуында ҡойондороуы була, ҡыҙ терелеп китә лә күҙҙәрен аса.

Уларҙы Ҡырмай тыуған яҡтарына осороп алып ҡайтып китте, ти.

Шул көндән алып Айтуған менән Айбикә бергә бәхетле донъя көтәләр, ти. Ә Ай әле һаман һәр төн һайын уларҙың юлдарын яҡтыртып тора, ти.

***Ғәбитова М.Н., Хәмидуллина Р.Ә.,***
*Үтәгән ауылы балалар баҡсаһы тәрбиәселәре*

**“Кейеҙҙән хәситә” проекты**
(мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн)

Элек-электән кейем халыҡтың йәшәү рәүешен, көнитмешен, милли үҙенсәлеген билдәләгән. Йәше лә, дәрәжәһе лә кейем аша сағылған. Быны, мәҫәлән, XIX быуаттың күренекле мәғрифәтсеһе М. Өмөтбаевтың «Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы» исемле әҫәрендә күрәбеҙ:

Һаҡал, таҡыя кейер –
Йәш ҡыҙ балалыр,
Тубай ҡашмау кейгән –
Ҡатын булалыр.

Тап кейемгә ҡарап, кешенең ҡайһы яҡтан икәнлеген асыҡлағандар.

*Проекттың маҡсаты:*

Башҡорт халының милли кейеме менән таныштырыу;

Балаларҙа башҡорт халҡының үткәненә, тарихына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү;

Үҙ ҡулдары менән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейеме – хәситәне кейеҙҙән эшләп ҡарау теләген булдырыу.

*Проекттың бурыстары:*

1. Атай-әсәйҙәрҙе балалар баҡсаһы тормошона йәлеп итеү;
2. Темаға ярашлы балаларҙың белемдәрен тәрәнәйтеү;
3. Балаларҙың ижади һәләттәрен асыуға шарттар булдырыу.

*Проекттың төрө:* ҡыҫҡа ваҡыт эсендә 6 йәшлек ҡыҙҙарға кейеҙҙән хәситә эшләргә өйрәтеү.

*Проекттың тормошка ашырылыу вакыты:* 1 ай: февраль 2021 йыл.

*Проектта ҡатнашыусылар:* мәктәпкә әҙерлек төркөмө ҡыҙҙары, тәрбиәселәр, атай-әсәйҙәр.

*Проектка әҙерлек:* төрлө иллюстрациялар, картиналар, видео-роликтар ҡарау.

*Проекттың актуаллеге:* бөгөнгө компьютер технологияһы заманында балаларҙы ҡул эшенә ҡыҙыҡһындырыу бик актуаль. Ошонан сығып, беҙ үҙебеҙҙең балалар баҡсаһында ҡыҙҙарҙың милли кейеменең бер төрө хәситә менән таныштырыуҙы, башҡорт милли кейеменә ҡарата ҡыҙыҡһыныу, ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләүҙе маҡсат итеп алдыҡ.

*Проекттың һөҙөмтәһе:*

1) балаларҙың килеп сыҡҡан һөҙөмтәнән ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереүе;

2) “ата-әсәләр – балалар баҡсаһы” бәйләнешенең нығыныуы;

3) балаларҙа башҡорт милли кейемдәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү;

4) кейеҙ файҙалы ғына түгел, ә зауыҡ сығанағы булыуын аңлатыу.

*Проекттың этаптары.*

*I этап – әҙерлек:*

башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының кейеме – хәситәне эшләү өсөн төрлө әҙәбиәттән, интернет селтәрҙәренән мәғлүмәт туплау;

хәситәне эшләр өсөн кәрәк булған бөтә материалдарҙы барлау: кейеҙ баҫыу өсөн һарыҡ йөнө, төрлө төҫтәге, төрлө ҙурлыҡтағы мәрйендәр, тәңкәләр, ептәр, таҫмалар;

мәктәпкә әҙерлек төркөмө ҡыҙҙары менән эш алдынан инструктаж үткәреү.

*II этап – эштең үтәлеше:*

1. Һарыҡ йөнөнән кейеҙ баҫыу;
2. Киптереү;
3. Ҡатырғы ҡағыҙҙан өлгө эшләү;
4. Өлгө буйынса бесеп алыу;
5. Контурын тегеп алыу;
6. Таҫма ҡырҡып алыу, тегеү;
7. Мәрйендәр менән биҙәү.

*III этап – йомғаҡлау:*

Эш һөҙөмтәһе менән 8 март байрамында таныштырыу.

Проектты тормошҡа ашырыу планы:

| Этаптары | Башҡарыласаҡ эштәр | Ваҡыты |
|---|---|---|
| әҙерлек | *Балалар менән:*<br>музейға сәйәхәт;<br>картиналар, журналдар ҡарау;<br>– видеояҙмалар ҡарау.<br>*Ата-әсәләр менән:*<br>– инструктаж алыу<br>– белешмәләр биреү;<br>– материалдар туплау.<br>*Тәрбиәселәр менән:*<br>балалар баҡсаһында башҡорт халҡының милли кейеменә ҡағылышлы мини-музей булдырыу. | Февраль,<br>1-се аҙна |
| эштең үтәлеше | балалар, атай-әсәйҙәр һәм тәрбиәселәр менән берлектә кейеҙ баҫыу;<br>балалар, тәрбиәселәр ярҙамында хәситә тегеү. | Февраль,<br>2-се, 3-сө аҙна |
| йомғаҡлау | балаларҙың хеҙмәтен баһалау;<br>башҡа төркөм балаларына күргәҙмә ойоштороу. | Февраль,<br>4-се аҙна |

## «Яландағы сәскәләр» проекты

*Проекттың максаты:*

Балаларҙа башҡорт халҡының үткәненә, тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыу;

Башҡорттарҙың боронғо кәсептәренең береһе – һарыҡсылыҡ менән таныштырыу;

Үҙ ҡулдары менән йөндән матурлыҡ тыуҙырыу теләген булдырыу, ялан сәскәләрен картина итеп эшләү.

*Проекттың бурыстары:*

Атай-әсәйҙәрҙе балалар баҡсаһы тормошона йәлеп итеү;

Темаға ярашлы балаларҙың белемдәрен тәрәнәйтеү;

Балаларҙың ижади һәләттәрен асыуға шарттар булдырыу.

*Проекттың тормошка ашырылыу ваҡыты:* 2 ай, декабрь-ғинуар 2020-2021 йылдар.

*Проектта ҡатнашыусылар:* мәктәпкә әҙерлек төркөмө балалары, тәрбиәселәр, атай-әсәйҙәр.

*Проектка әҙерлек:* төрлө иллюстрациялар, картиналар, видео-роликтар ҡарау.

*Проекттың актуаллеге:* балаларҙа ҡул эшенә ҡыҙыҡһыныу уятыу.

*Проекттың һөҙөмтәһе:* балаларҙың килеп сыҡҡан һөҙөмтәнән ҡәнәғәтлек тойһо кисереүе;

Ата-әсәйҙәрҙең балалар баҡсаһы менән тығыҙ бәйләнештә булыуы;

Балаларҙа башҡорт милли кейемдәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү;

Йөндән төрлө әйберҙәр эшләү мөмкинлеген балаларға еткереү.

*Проекттың этаптары.*

*I этап – әҙерлек:* ялан сәскәләрен йөндән эшләү өсөн төрлө әҙәбиәттән, интернет селтәрҙәренән мәғлүмәт туплау; картина эшләү өсөн кәрәк булған бөтә материалдарҙы барлау; мәктәпкә әҙерлек төркөмө ҡыҙҙары менән эш алдынан инструктаж үткәреү.

*II этап – эштең үтәлеше:*

1. Йөндән фон эшләп алыу;
2. Сскә формаһына килтереп теҙеп һалыу.

*III этап – йомғаклау:*

Эш һөҙөмтәһе менән ата-әсәләр йыйылышында таныштырыу.

Проектты тормошҡа ашырыу планы

| Этаптары | Башҡарыласаҡ эштәр | Ваҡыты |
|---|---|---|
| *әҙерлек* | *Балалар менән:*<br>музейға сәйәхәт<br>картиналар, журналдар | Декабрь |

| | | |
|---|---|---|
| | ҡарау;<br>видеояҙмалар ҡарау;<br>сәскәләрҙең һүрәттәрен ҡарау.<br>*Ата-әсәләр менән:*<br>инструктаж үткәреү;<br>белешмәләр биреү.<br>*тәрбиәселәр менән:*<br>материалдар туплау. | |
| *эштең үәтлеше* | балалар, тәрбиәселәр ярҙамында сәскәләр эшләү | Ғинуар<br>2-се, 3-сө аҙна |
| *йомғаҡлау* | балаларҙың хеҙмәтен баһалау;<br>башҡа төркөм балаларына күргәҙмә ойоштороу. | Ғинуар<br>4-се аҙна |

***Зәйнишева Д.Р.,***

*Аскар ауылы “Миләш” балалар баҡсаһы тәрбиәсе*

**Өләсәйем һандығы**

(мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн)

Бурыстар:

1. Балаларҙа халҡыбыҙҙың тарихына, мәҙәниәтенә, фольклорына һәм өлкән быуынға ҡарата ихтирам, ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү;
2. Балаларҙын һөйәү телмәрен үҫтереү;
3. Балаларҙы  башҡорт фольклоры менан таныштырыу.

**Дәрес барышы**

Тәрбиәсе: Балалар, бөгөн Наҙгөлдең өләсәһе шылтыратты. Ул беҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙы. Барайыҡмы?

Балалар: Эйе, барайыҡ, барайыҡ!

Тәрбиәсе: Улай булғас, матурланып алайыҡ та бергәләп ҡунаҡҡа барайыҡ. Ҡунаҡта үҙегеҙҙе һәйбәт тотоғоҙ.

Балалар: Һаумыһығыҙ, өләсәй!

*Ҡурай моңо яңғырай.*

Өләсәй: Һаумыһығыҙ, балалар! Әйҙәгеҙ түргә үтегеҙ, ултырығыҙ. Самауырым да ҡайнап сығыр. Сәй ҡайнап сыҡҡансы, “Бармаҡ” уйынын уйнап алайыҡ.

Мин – баш бармаҡ, баш бармаҡ,
Һәр эште мин башлайым.
Өй эсен дә тиҙ генә
Йыйыштырып ташлайым.
Баш бармаҡ, һуҡ бармаҡ,
Урта бармаҡ,
Сығанаҡ бармаҡ,
Сәтәкәй бармаҡ –
Бөтәһе лә дуҫ булмаҫ,
Эше лә бергә булмаҫ.

Өләсәй: Афарин, балалар! Матур уйнайһығыҙ.

Тәрбиәсе: Ҡыҙҙар, биҙрәләрегеҙ менән бер бейеп алығыҙ

*Биҙрәләр менән бейеү*

Өләсәй: Һай, афарин, ҡыҙҙар! Ҡайһылай уңғанһығыҙ. Балалар, хәҙер беҙгә әхирәттәрем, ағинәйҙәр, килә.

Бала: Өләсәй, кемдәр ул ағинәйҙәр?

Өләсәй: Ағинәйҙәр – улар ауылыбыҙҙың иң аҡыллы ил инәләре, йор һүҙле, алсаҡ, аҡ күңелле улар. Илдең терәге һәм таянысы.

*Ағинәйҙәр инәләр.*

– Һаумыһығыҙ!

Өләсәй: Һаумыһығыҙ! Бына улар. Имен-һау ғына килеп еттегеҙме? Әйҙәгеҙ түргә үтегеҙ, ултырығыҙ, ҡәҙерле ҡунағыбыҙ булырһығыҙ. Мин һеҙҙе һағынғайным. Ҡунаҡҡа килеүегеҙгә шул тиклем шатмын.

Ағинәйҙәр: Беҙ ҙә бик шатбыҙ. Ҡыуанышып килеп еттек. Бына һеҙгә, һуғыш йылдарындағы ризыҡтан ауыҙ иттермәксе булып, күстәнәс итеп талкан менән ҡурмас алып килдек. Бергәләп сәй эсербеҙ. Бәлеш бешерҙек. Ә мин ейәнем менән килдем әле.

Өләсәй: Бына балалар менән бергә уйнарҙар. Бик һәйбәт.

Тәрбиәсе: Ҡәҙерле өләсәйҙәр! Ейән-ейәнсәрҙәрегеҙҙең һеҙгә бағышланған шиғырҙарын тыңлап алайыҡ.

*Шиғырҙар:*

1-се бала:

Оло инде өләсәйем,
Байтаҡ ғүмер кисергән.

Атайымды,туғандарҙы
Яҡшы итеп үҫтергән.
2-се бала:
Оло булһа ла өләсәй,
Ҡулдары уның йомшаҡ.
Тәмле аштарын бешерә,
Өҫтәле тулы һәр саҡ.
3-се бала:
Туған телде һаҡлап ҡалған
Ҡәҙерле өләсәйҙәр.
Ил менән бергә ҡайғы күргән –
Улар бит өләсәйҙәр.
3-се бала:
Үҙ ғүмерендә әллә күпме
Яу күргән өләсәйҙәр.
Етмеш ҡайғы, етмеш шатлыҡ
Кисергән өләсәйҙәр.
4-се бала:
Мин һеҙҙе алҡышлайым,
Ҡәҙерле өләсәйҙәр.
Ҡайғы-хәсрәт күрмәгеҙ,
Шат булһын һеҙҙең йөҙҙәр.
Өләсәй:
Рәхмәт, балалар!
5-се бала:
Өләсәйҙең һандығында
Һаҡланмай низәр генә.
Һорайыҡ әле үҙенән,
Асып күрһәтһен беҙгә.

Өләсәй: Хәҙер, хәҙер, балалар! Һандыҡты асам һәм һеҙгә ундағы хазинаны алып күрһәтәм. Унда минең ҡомартҡыларым, иҫтәлекле нәмәләрем бар.

Ағинәй: Әйҙә, асып ебәр һандығыңды.

Тәрбиәсе: Өләсәй һандыҡты асҡансы беҙ «Тирмә» уйынын уйнап алайыҡ.

*«Тирмә» уйыны*

Беҙ – күңелле, шат балалар,
Уйнайбыҙ ҙа бейейбеҙ.

Ҙур түңәрәккә йыйылып,
Матур тирмә яһайбыҙ.
Ҡушымта: Лә-лә -лә-лә.
Өләсәй: Был нимә, балалар?
Балалар: Башҡорт күлдәге.
Өләсәй: Балитәкле, биҙәкләп тегелгән күлдәк. Быны мин килен булып төшкән ваҡытта кейгәйнем. Ә быныһы – бишмәт. Уны миңә өләсәйем бүләк иткәйне. Ҡарағыҙ әле, бик боронғо бишмәт. Тәңкәләре ниндәй матур, төрлө биҙәктәр төшөрөлгән.

*Башҡорт ҡыҙҙары бейеүе*

Өләсәй: Бына был кәзә мамығынан йәш саҡта бәйләгән шәлем. Ҡәҙерләп, һаҡлап ҡына ябынам мин уны.
Балалар: Ә беҙ, өләсәй, ошо шәлгә арналған йыр beләбеҙ. Беҙ йырлайыҡ, һеҙ бейейһегеҙме?
Өләсәй: Әхирәттәрем, әйҙәгеҙ бер бейеп алайыҡ, ә балалар йырлаһындар.

*Өләсәйҙәр бейеүе. "Шәл бәйләнем"*

Өләсәй: Балалар, был нимә?
Балалар: Беләҙек.
Өләсәй: Уны ҡайҙа кейәләр?
Балалар: Ҡулға кейәләр.
Тәрбиәсе: Балалар, «Үгеҙ йөҙөгө» уйынын уйнап алайыҡ.
*Үгеҙ һәм йөҙөгөн һалыусыны һанашмаҡ әйтеп һайлайҙар:*
«Бер бабай юлға сыҡҡан,
Тәгәрмәсе боҙолған.
Тәгәрмәсен йүнәтергә
Нисә сөй кәрәк булған?
– Биш.
Бер, ике, өс, дүрт, биш.
Һин бар сыҡ!»
Өләсәй: Бына минең йөҙөгөм. Әйҙә, һалып сыҡ.
Балалар: Үгеҙ йөҙөгө кемдә? *(Эҙләй)*
Балалар: Тапманы, тапманы!
Тәрбиәсе: Ниндәй яза бирәйек?
Балалар: Йырлаһын!

*"Айҙар ғынайым" йыры*

Өләсәй: Бына был – олатайығыҙҙың миҙалы.
*Малай йүгереп килә.*

Өләсәй, ҡайҙа мин ҡарайым әле. О-һо! Иптәштәремә күрһәтеп, маҡтанып киләйем әле.

Өләсәй: Туҡта, туҡта, тороп тор, балаҡайым! Ул бит ҡомартҡы. Уйнатырға ярамай. Олатайығыҙ һуғышта батырлыҡтар күрһәткәне өсөн ошо миҙал бүләк иткәндәр. Быны бик ныҡ һаҡларға кәрәк. Олатайығыҙ һуғышта яу ҡырҙарында һуғышып, немец фашистарын еңеп ҡайтып, үҙебеҙҙең илебеҙгә матур итеп хеҙмәт итеп, мәрхүм булып ҡалды инде.

Тәрбиәсе: Әйҙәгеҙ, балалар, олатайҙарыбыҙҙы, һуғыш ветерандарын иҫләп, йырлап алайыҡ.

*“Олатайым миҙалдары” йыры (өләсәй күҙ йәштәрен һөртә)*

Өләсәй: Үткән һуғыш ваҡыттары иҫкә төшөп китте (*түбәтәйҙе ала*). Ҡарағыҙ әле, түбәтәйҙе башҡорт биҙәктәре менән биҙәгәндәр.

Тәрбиәсе: Балалар, иҫләйһегеҙме беҙ һеҙҙең менән түбәтәй уйынын уйнай торғайныҡ. Әйҙәгеҙ, өләсәйгә уйнап күрһәтәйек.

*“Түбәтәй” уйыны*

Тәрбиәсе (*Ағинәйгә ҡарап*): Ағинәй, һеҙҙең ҡулығыҙҙа нимә ул?

Ағинәй: Элек йәш сағымда ҡумыҙҙа уйнай торғайным. Һеҙгә уйнап күрһәтергә тип алып килдем.

*Ағинәй ҡумыҙҙа уйнай.*

Өләсәй (*һандыҡтан ике ҡуллап, ҡәҙерләп ҡурайҙы ала*): Олатайығыҙҙың ҡәҙерле ҡомартҡыһы. Бына был нимә, балалар?

Балалар: Ҡурай.

Өләсәй: Башҡорт халҡының иң боронғо музыка ҡоралы – ҡурай. Халҡыбыҙ ҡурай моңо менән күңелен дә асҡан, ҡайғы-хәсрәттәрен дә баҫҡан, яуға ла сапҡан һәм, әлбиттә, беҙҙең халҡыбыҙ ҡурайҙы борондан киләсәк быуынға тиклем уйнай белеп еткерергә тырышҡандар. Балалар, һеҙ ҙә ҡурайҙа уйнарға өйрәнегеҙ.

Тәрбиәсе: Хөрмәтле өләсәйҙәр! Ғүмерегеҙҙе кешелеккә бағышлағанһығыҙ, намыҫлы хеҙмәтегеҙ өсөн һеҙгә ҙур рәхмәт! Илебеҙ тыныс, күгебеҙ аяҙ булһын.

Өләсәй: Әйҙәгеҙ бергәләшеп күстәнәс менән сәй эсәйек.

***Йомағужина А.С.,***
*Аҫҡар ауылы “Ҡайынҡай” балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе*

**“Ҡарғатуй” байрамы**
(мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн)

Бурыстар:

1. Балаларға башҡорт байрамы тураһында төшөнсә биреү;
2. Бәйләнешле телмәр үҫтереү;
3. Үҙ халҡындың мәҙәниәтенә, халыҡ уйындарына, йырҙарына, байрамдарына ҡыҙыҡһыныу, өйрәнергә теләк уятыу.

**Байрам барышы**

Тәрбиәсе: Ҡәҙерле ҡунаҡтар, балалар! Беҙ бөгөн борондан килгән йола – «Ҡарғатуй» йәки «Ҡарға бутҡаһы» байрамына йыйылдыҡ. Беҙҙең өләсәй-олатайҙар һыуыҡ ҡыш үтеп, яҙ еткәс, ҡырға сыҡҡандар һәм «Ҡарғатуй» байрамы үткәргәндәр. Был байрамды бик көтөп алғандар. Халыҡ уйнап-көлөп, йырлап-бейеп күңел асҡан, тәмле бутҡа бешереп һыйланған, әлбиттә, ҡарғаларға ла өлөш ҡалдырған. Сөнки ҡарғаларҙы ризалатһалар, йыл күркәм, уңдырышлы, мул, бай килер тигән ышаныс булған. Ололар: «Һау булғас, ҡарғалар ҡайтып, ҡар бөтөп, ҡара ергә баҫыр көн дә тыуҙы», – тип ҡыуанғандар.

1-се бала: (*йүгереп йөрөй*)

Ҡарға әйтә: ҡарр-р, ҡарр-р!
Ҡарғатуйға барр-р, барр-р!
Һый-хөрмәтең алып бар.
Ҡарғатуйға бармағандың
Күңеле булыр тарр-р, тарр-р!
Ҡарр-р! Ҡарр-р! Ҡарр-р!Ҡарр-р!

Тәрбиәсе: Балалар, әйҙәгеҙ, матур таҫмалар, мунсаҡтар, сәскәләр, яулыҡтар менән ағастарҙы биҙәйек.

*Балалар, берәмләп сығып, таҫмаларын һәм башҡа бүләктәрен ағасҡа бәйләйҙәр, теләк теләйҙәр.*

– Сылтырашып торһондар.
– Елберҙәшеп торһондар.
– Беҙҙе иҫләп торһондар.
– Ҡотто һаҡлап торһондар!
– Яман күҙҙән һаҡлаһындар.

– Татыулыҡты маҡтаһындар!
– Ғәзеллекте яҡлаһындар.
– Именлек теләһендәр.
Тәрбиәсе:
Бейегеҙ әле, малайҙар,
Бейегеҙ әле, ҡыҙҙар!
Үҙебеҙсә, саф башҡортса,
Йырлайыҡ әле йырҙар!
*Балалар «Күңелле яҙ килә», «Әлиләү генәйем» йырҙарын йырлайҙар.*
Тәрбиәсе: Хәҙер күмәкләп уйнап алайыҡ.
*«Йәшерәм яулыҡ» уйыны уйнала. Уйындан һуң өләсәй килеп керә.*
Өләсәй: Ҡарғатуй йыйынына саҡырҙығыҙмы, балалар? Матур йырлаған, сыр-сыу килеп уйнаған тауыштарығыҙҙы ишетеп килеп тә еттем Ҡарғатуй байрамына.
«Буғыр-буғыр» бутҡаһы,
Бутайһы ла бутайһы!
«Ҡарға бутҡаһы» бешә,
Онотманым бер эш тә:
Һибәм иләнгән онтаҡ
Бутҡа өҫтөнә ап-аҡ.
Инде серен белегеҙ,
Йотоп ҡуйма телегеҙ.
Мин һеҙгә тәмле бутҡа бешерәйем, ә һеҙ уйнап-көлөп, йырлап күңел аса тороғоҙ.
*Өләсәй кире сығып китә.*
Тәрбиәсе: Беҙҙең ҡыйыу малайҙар көс һынашып алһындар.

*«Арҡан тартыш» уйыны*

Афарин, малайҙар. Бик көслө булып сыҡтығыҙ.
2-се бала:
Таянабыҙ бөйөргә,
Тотонабыҙ бейергә,
Тыпыр-тыпыр тыпырлатып,
Әйләнәбеҙ беҙ бергә.

*Күмәк бейеү*

3-сө бала: Бутҡа бешкәндер инде!
4-се бала:
Тәмлеме икән бутҡаһы,

Ауыҙ итәйек әле.
Матур яҙҙы ҡаршылап,
Байрам итәйек әле.
5-се бала:
Һалҡын ағай, кит-кит,
Ҡояш апай, сыҡ-сыҡ.
Һөтлө һыйыр – яланда,
Майлы бутҡа – ҡаҙанда,
Тәтәй ҡалаҡ – баҙарҙа.
6-сы бала:
Бутыр-бутыр бутҡа бешә,
Уртаһына май төшә.
Килгән ҡунаҡ беҙгә төшә,
Беҙҙә тәмле бутҡа бешә.
7-се бала:
Бутыр-бутыр бутҡа бешә,
Уртаһына май төшә.
Бутҡа бешергән ҡортҡаның
Фатихаһы мул төшә.

*Ҡарға маскаһын кейгән бала түңәрәк буйлап йүгереп килеп сыға ла һөйләй.*

Ҡарр-р, ҡарр-р! Ҡарғатуйға бар-р, бар-р!
Ҡарғатуйға бармағандың күңеле булыр тар-р, тар-р!
Ҡарғатуйға бар-р, бар-р! Ҡарғатуйҙан ҡалмағыҙ!
Ҡар-р, ҡар-р, ҡар-р!

*Өләсәй ҡаҙан тотоп инә.*

Өләсәй: Балалар, тәмле бутҡа бешеп тә сыҡты. Әйҙәгеҙ, ашъяулыҡ янына, тирәләп ултырығыҙ.

*Ашъяулыҡтың уртаһына бутҡа ултырталар, эргәһенә иретелгән май ҡуйыла. Бөтәһе лә бутҡа ашайҙар.*

Тәрбиәсе: Бутҡа бик тәмле булды, ҙур рәхмәт. Ҡарғаларҙы ла ризалатайыҡ, ямғырҙы ваҡытында яуҙырһындар, илгә именлек, беҙгә туҡлыҡ, һаулыҡ теләһендәр. Бутҡаны ағас төптәренә һалып сығайыҡ. Беҙ киткәс, ҡарғалар килеп ашарҙар.

7-се бала:
Ашағыҙ, туйығыҙ,
Илгә именлек килтерегеҙ!
Бер бойҙайға – ун бойҙай,

Ун бойҙайға – мең бойҙай!
8-се бала:
Бутҡа – ҡарға аҙығы,
Бутҡа – ҡарға аҙығы.
Шул бутҡаны хурлаһаң,
Башыңа төшөр яҙығы.
Ал ризыҡты, ал, аша, ҡарғам, аша!
Бөтәһе бергә:
Ал ризыҡты, ал,
Аша ҡарғам, аша!
9-сы бала:
Ҡара ҡарға ашамаһа,
Ала ҡарға ашаһын.
Ала ҡарға ашамаһа,
Ҡара ҡарға ашаһын.
Өләсәй:
Ҡарға килмәй – ҡар китмәй,
Ҡарға килмәй – яҙ етмәй.
Ҡабул итеп йыйынды,
Ҡабул итеп һыйымды,
Беҙгә ямғыр яуҙырһын,
Яу-яу, ямғырым,
Яу-яу, ямғырым!
Тәрбиәсе: Ямғыр бөтә кешеләргә лә бәхет алып килһен.
Көймәләре һәңгелсәк,
Арбалары ҡалтырсаҡ.
Ҡарға туйы булды тамам,
Инде килде ҡайтыр саҡ.

*Ҡулланылған әҙәбиәт:*

1. Аҙнабаева Ф.Ғ., Шафикова Г.Р. Тәбиғәт һәм кеше. Өфө: Китап, 2012.

2. Ғөбәйҙуллина Ф.Ғ. Беҙҙең байрамдар. Өфө: Китап, 2004.

3. Ғөбәйҙуллина Ф.Ғ. Мәктәп сәхнәһе өсөн башҡортса йола байрамдары. Өфө: Китап, 2012.

4. Нафикова З.Г. Этноэкологические наблюдения природы на основе башкирских народных примет. Уфа: Китап, 2017.

***Йәнбирҙина И.Б.,***
*Аҫҡар ауылы балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе*

**Кейеҙ баҫыу**
(өлкәндәр төркөмө өсөн)

Бурыстар:
1. Кейеҙ баҫыу тураһында мәғлүмәт менән таныштырыу;
2. Һорауҙарға тулы һәм аңлайышлы яуап бирергә өйрәтеү, бәйләнешле телмәр үҫтереү;
3. Балаларҙа башҡорт халҡының бороңғо шөғөлөнә ихтирам тәрбиәләү.

**Дәрес барышы**

Тәрбиәсе: Балалар, мин һеҙгә йомаҡ ҡоям, иғтибар менән тыңлағыҙ:

Ойоҡтар ҙа өҫтөндә,
Быймалар ҙа өҫтөндә,
Өшөтмәйем, тип,
Йүгерәм тау өҫтөндә. (һарыҡ)

Ни өсөн йомаҡта “ойоҡтар ҙа өҫтөндә, быймалар ҙа өҫтөндә” тип әйтелә икән?

Балалар: Сөнки һарыҡ йөнөнән ойоҡтар, бейәләйҙәр, баш кейеме бәйләйҙәр, быйма баҫалар.

Тәрбиәсе: Тимәк, бөгөн беҙ һеҙҙең менән нимә тураһында һүҙ алып барырбыҙ?

Балалар: Һарыҡ йөнө тураһында.

Тәрбиәсе: Һарыҡ йөнөнән кейеҙ баҫыу тураһында һөйләшеүҙе дауам итербеҙ. Әлбиттә, һарыҡ йөнө бик файҙалы. Уның йөнөн беҙҙең әсәй-өләсәйҙәребеҙ иләй, сирата, йомғаҡ яһай һәм беҙгә бейәләй, шарф, ойоҡтар бәйләп кейҙерәләр. Ә һарыҡ йөнөнөң тағы ниндәй файҙаһы бар икән?

*Иллюстрациялар буйынса һөйләү.*

1-се бала:

1. Һарыҡты көҙ һәм яҙ көнө ҡырҡалар.
2. Һарыҡ беҙгә ит, йөн бирә, һарыҡ йөнө беҙҙе йылыта.
3. Йөндән баҫылған быйма ҡыш көнө аяҡтарҙы өшөтмәй.
4. Аяҡтарға һыуыҡ үтмәһен өсөн олтораҡ һалабыҙ.

5. Кейеҙ баҫҡандар, ул балаҫ урынына ҡулланылған, тирмәне ҡаплағандар, ат өҫтөнә япҡандар.

Тәрбиәсе: Эйе, афарин! Шулай итеп, кеше өсөн һарыҡ йөнөнөң файҙаһы бик күп. Элегерәк ата-бабаларыбыҙ яра булған урындарға таҙа һарыҡ йөнөн һалғандар, ул яраны тиҙ арала бөтәштергән. Ә хәҙер беҙҙең өләсәйҙәребеҙ билдәре ауыртһа, аяҡ, ҡулдарының быуындары ауыртҡан урындарға бәйләйҙәр. Ялан аяҡҡа һарыҡ йөнөнән бәйләнгән ойоҡ кейһәң, аяҡтарҙы йылыта. Ә бына минең өләсәйем күҙ теймәһен өсөн сәңгелдәгемә йоҡа кейеҙ түшәгән. Кейеҙ баҫыу тураһында видеоматериал ҡарайыҡ.

*Видеоматериал ҡарау.*

Тәрбиәсе: Шулай итеп, кейеҙ нисек баҫыла? Кем һөйләргә теләй?

2-се бала:

1. Һарыҡтың йөнөн ҡырҡырға.
2. Йөндө тетергә.
3. Йәйеп һалырға.
4. Һабындың иҙмәһен өҫтөнә һибергә.
5. Йылы һыу ҡойорға.
6. Түңәрәк таяҡҡа уратырға һәм тәгәрәтергә.
7. Тәгәрәткәндән һуң, кейеҙ әҙер булғас, һалҡын һыуҙа сайҡатырға. Киптереп алырға.

Тәрбиәсе: Балалар, арып киттек, уйнап алайыҡ!

*Ял минуты. Музыка, балалар ҡапма-ҡаршы тороп әйтешәләр*

Малайҙар:
Әйтегеҙ әле, ҡыҙҙар,
Нисек йөндө тетәләр?
Ҡыҙҙар:
Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай тетәләр (*хәрәкәт күрһәтәләр*).
Ҡыҙҙар:
Әйтегеҙ әле, малайҙар,
Нисек кейеҙ баҫалар?
Малайҙар:
Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай баҫалар.
Малайҙар:
Әйтегеҙ әле, ҡыҙҙар,
Нисек кейеҙ йыуалар?

Ҡыҙҙар:
Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай йыуалар.
Тәрбиәсе:
Әйтегеҙ әле, балалар,
Нисек күңел асалар?
Балалар:
Бына шулай, бына шулай,
Шулай күңел асалар.
Практик эш:

Тәрбиәсе: Балалар, кейеҙ беҙҙең халыҡты йылытҡан да, һауыҡтырған да. Шул уҡ ваҡытта тап кейеҙ баҫҡан саҡта һәр ырыу, һәр ара үҙенең билдәләрен, күңел йылыһын һалырға тырышҡан. Беҙ алдаағы дәрестәрҙә һәр ырыу менән танышҡайныҡ, ә бөгөн ырыуыбыҙ Тамъян тамғаһын кейеҙҙә баҫабыҙ. Тамға нимә ул?

Балалар: Тамға – ул билдә.

Тәрбиәсе: Бына ул тамғалар (*бер нисә ырыуҙың тамғаларын күрһәтелә*). Һәр башҡорт ырыуының үҙ тамғаһы, ҡошо һәм ағасы булған. Ә бына тамъяндарҙың тамғаһы – ҡусҡар, ағасы – тирәк, ҡошо – ҡарға.

*Балалар алъяпкыс кейәләр, яулыҡ ябыналар, талғын ғына башҡорт көйө уйнай.*

Һеҙҙең алда тетелгән ҡара һарыҡ йөнө һәм аҡ төҫтәге һарыҡ йөнө ята. Иң тәүҙә аҡ туҡыманы түшәйбеҙ, унан һуң аҡ йөндө йәйеп һалабыҙ (*балалар үҙ аллы эш башҡара*).

Тәрбиәсе: Балалар, ниндәй тамғаны һалабыҙ?

Балалар: Беҙҙең тамғабыҙ – ҡусҡарҙы.

Тәрбиәсе: Бына, тамғабыҙ әҙер, өҫтөнә һабындың иҙмәһен һибеп сығайыҡ. Хәҙер бер аҙ ғына йылы һыу һибеп, алдығыҙҙа ятҡан түңәрәк таяҡҡа уратып тәгәрәтәйек. Нығыраҡ баҫып тәгәрәтәбеҙ. Кейеҙебеҙ әҙер, һалҡын һыуҙа сайҡатып алайыҡ. Кейеҙҙе киптерергә һалып ҡуяйыҡ.

*Балалар ҡулдарын йыуа.*

Тәрбиәсе: Бөгөн һеҙ нимәгә өйрәндегеҙ? Кейеҙ баҫыу оҡшанымы? Ни өсөн? Беҙҙең ырыуыбыҙ нисек атала? Ырыуыбыҙҙың тамғаһы нисек атала?

*Махийәнова Р.С.,*
*Ҡырҙас урта мәктәбе янындағы балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе*

## Һыйлы көнөң – һыйырҙа

(мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн)

Бурыстар:

1. Балаларҙың йорт хайуандары тураһындағы белемдәрен дөйөмләштереү, белемдәрен арттырыу;

2. Йорт хайуаны – һыйыр, унан алынған һөт ризыҡтары менән таныштырыу;

3. Тәбиғәткә, хайуандарға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Дәрес барышы**

1. Дәрес темаһы, маҡсаты менән таныштырыу.

Балалар, бөгөн беҙ бөтәбеҙгә лә таныш булған, һәр беребеҙҙең кәртәһендә йәшәгән, беҙҙе туйындырып, ашатып, һөт ризыҡтары менән һыйлап торған йорт хайуаны – һыйыр тураһында һөйләшербеҙ.

2. Үтелгәнде ҡабатлау. Һүрәттәргә иғтибар итегеҙ. Ниндәй хайуан төшөрөлгән: йорт хайуанымы әллә ҡыр хайуанымы?

Былар ниндәй хайуандар? (Йорт хайуандары: һыйыр, һарыҡ, кәзә һ.б.)

Былар ниндәй хайуандар? (Ҡыр хайуандары: бүре. айыу, болан һ.б.)

Был хайуандар ни өсөн йорт хайуандары тип атала? Сөнки улар йорт-курала йәшәй, улар кешеләрҙең ярҙамына мохтаж.

Ҡыр хайуандары үҙҙәрен үҙҙәре ҡарай. Аҙыҡты үҙҙәре таба шуның өсөн ҡыр хайуандары тип аталалар.

*Уйын “Дөрөҫ билдәлә”*

Һеҙҙең алдығыҙҙа карточкалар (йорт һәм ҡыр хайуандары һүрәттәре) ята. Ике төркөмгә бүлегеҙ: “йорт хайуандары” һәм “ҡыр хайуандары”.

Афарин, хайуандарҙы дөрөҫ билдәләнегеҙ.

3. Яңы тема өҫтөндә эш. *Әңгәмә.*

Йорт хайуандары электән үк беҙҙең кәртәлә йәшәгәндәрме икән? (*Балаларҙың яуаптары)*

Юҡ, балалар. Бик борон заманда бөтә хайуандар ҙа урманда йәшәгәндәр, уларҙы кешеләр яйлап үҙҙәренә эйәләштереп алғандар.

Әлеге вакытта беҙҙең кәртәләге бөтә хайуандар ҙа эйәләштерелгәндәр, элек улар кыр хайуандары булғандар.

*Һүҙлек эше*

*Һыйлы* тигән һүҙҙе нисек аңлайһығыҙ? (*Балаларҙың яуаптары)*

*Һыйлау* “ашата” тигәнде*, һый, һый-хөрмәт* тигән һүҙҙәр “ризык”, “аш” мәғәнәһен аңлата.

*Ял минуты*

Балалар, беҙҙең бөтәбеҙҙең дә өйҙә һыйырыбыҙ бар. Һыйыр беҙҙе нимә менән һыйлай? (*Балаларҙың яуаптары: һөт, каймак, май, катык, сыр)*

Һөттән күп төрлө ризыктар әҙерләп була: эремсек, сыр, корот, ойоткан, йогурт, май, каймак һ.б.

Һеҙҙең һыйырҙарҙың кушаматы бармы?

*Һәр бер бала әйтеп сыға*.

Малға кеше исемен кушырға ярамай, был кешеләрҙе, бер-берендә хөрмәтләмәүгә тиң. Һыйырға исем уның төҫөнә, холкона карап бирелә. Мәҫәлән, үҙе һоро булып, башы ак булһа, ниндәй исем кушырға була? (*Акбаш*) Төҫө төрлө-төрлө булһа – (*Алакай, Сыбаркай*). Кара булһа – (*Каракай*) һ.б.

Балалар, һыйыр беҙгә күп һөт бирһен өсөн беҙ уларҙы ни эшләтергә тейешбеҙ? (*Балаларҙың яуаптары: һыу эсерергә, бесән ашатырға, торған урынын таҙаларға һ.б.)*

Дөрөҫ, уларҙы яратырға, һукмаҫка тейешбеҙ. Сөнки улар – бик иҫле хайуан. Уларҙың бик иҫле булыуын “Куңырбуға” легендаһында бик асык һүрәтләгәндәр.

*Легенда тыңлау*.

Таңдыса исемле кыҙҙы алыҫка, ялан яктарына, кейәүгә бирәләр, уға Куңырбуға исемле һыйыр биреп ебәрәләр. Кыш үтеп, йәй еткәс, Куңырбуға, быҙауын эйәртеп, Урал тауҙары буйлап тыуған төйәгенә кайтып китә. Таңдыса, уларҙың юлынан юллап, Урал тауҙарын артыла-артыла килә һәм табып ала. Хәҙер ул юлды Куңырбуға юлы тип йөрөтәләр.

Балалар, һеҙ йорт хайуандары тураһында бик күп шиғырҙар беләһегеҙ. Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙгә һөйләп ишеттерәйек.

*Шиғырҙар һөйләү*.

1-се бала:

Өсәүләшеп карап торҙок

Әсәй һыйыр һауғанын,

Ап-аҡ һөттөң күбекләнеп
Биҙрәбеҙгә тулғанын.
2-се бала:
– Ала һыйыр, ҡайҙа киттең?
– Туғайға, туғайға.
Йомшаҡ, йәшел үлән ашап,
Ҡоштар йырын тыңларға.
3-сө бала:
– Алаҡай ҡасан ҡайтаһың?
– Кис менән, кис менән.
Бөтәгеҙҙе лә һыйлармын
Һөт менән, һөт менән.
Афарин, балалар.

– Шулай итеп, балалар бөгөнгө дәрес һеҙгә оҡшанымы? Һыйыр йорт хайуанымы әллә ҡыр хайуанымы? Ни өсөн һыйлы көнөң – һыйырҙа, тип әйткәндәр?

Афарин, балалар! Һеҙ бөгөн дәрестә нимә белдегеҙ?

## Башҡорт халкының милли музыка ҡоралы – ҡурай

Бурыстар:

1. Балаларҙы боронғо башҡорт музыка ҡоралы менән таныштырыу, һүҙҙәрҙе ижеккә бүлергә өйрәтеү;

2. Күнегеүҙәр эшләү барышында бәйләнешле телмәр үҫтереү;

3. Милли ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү, экологик тәрбиә биреү.

Дәрес барышы

1. Ойоштороу моменты.

Һаумыһығыҙ, балалар. Бөгөнгө дәрестең маҡсаты боронғо башҡорт милли музыка ҡоралы – ҡурай менән танышыу. Беҙ ҡурай тураһындағы легенда, уның ниндәй урындарҙа үҫкәне, ниндәй төр ҡурайҙар булыуы, нисек эшләнеше менән танышырбыҙ.

2. Төп өлөш: әңгәмә.

Ҡурайҙы күргәнегеҙ бармы? Тауышын ишеткәнегеҙ бармы? Бына был – ҡурай үләне (*үҫеп ултырғанын күрһәтәм*). Ә бына был – ысын ҡурай (*уйнай торғанын күрһәтәм*), ошо үҫеп ултырған үләндән эшләнгән. Уның оҙонлоғо һигеҙ тотам һәм биш бармаҡ менән баҫа торған урыны (*тишектәр*) бар.

Оҫталар ҡурайға бармаҡ баҫа торған урын эшләгәндә ошолай тип әйтәләр икән:

– Ҡурай!

– Әү!

– Ҡайҙа үҫтең?

– Урманда.

– Кем ҡырҡты?

– Оҫта ҡырҡты.

– Ни эшләргә?

– Уйнарға.

1925 йыл атаҡлы ҡурайсы Йомабай Иҫәнбәев сит илдә, Париж сәхнәһендә, тамашасылар күҙе алдында ҡурай эшләп уйнап ебәрә, уның оҫталығына бөтәһе хайран ҡала. Был ябай көпшәнән нисек инде ундай моңло көй сыҡһын, тип ышанмай улар. Ҡурайсының ауыҙ эсен астырып ҡарап бөткәндәр. Ҡурай эсендә берәй нәмә тормаймы, тип тикшерәләр.

Ҡурайсы Юлай Ғәйнетдинов фекеренсә, ҡурай бынан бик борон 18 быуат элек билдәле булған. Ә нисек уйнай башлағандар икән ҡурайҙа? Бына тыңлағыҙ, ҡурай тураһында бик матур легенда бар. Тик легенданы тыңлар алдынан бер аҙ ял итеп алайыҡ.

*Ял минуты*

Бик борон Искәндәр исемле батша йәшәгән, ти. Ул мөгөҙлө булған һәм кем уның сәсен ала, шуны үлтереп торған. Мөгөҙө тураһында кешеләр белеүҙән ҡурҡҡан. Бер ваҡыт уның сәсен алырға йәш кенә егет килгән. Юлда ныҡ асығып килгәс, егет әсәһе күкрәк (имсәк) һөтөнә баҫып бешергән ҡул икмәкте тәмләп тороп ашап ултыра икән.

Батша уның ашауына ҡыҙығып ҡарап торған да үҙе лә һорап ашаған.

– Икмәкте кем бешерҙе? – тип һорай икән батша.

– Әсәйем күкрәк һөтөнә баҫып бешерҙе, – ти икән егет.

Хәҙер батша аптырай, ти, был егет менән туған булдыҡ, бер әсә һөтөн тәм иттек, уны үлтереп булмай бит, тип уйлай икән.

Сәсен алып бөткәс, егетте алыҫ ҡара урманға алып барып ташларға ҡуша. “Юл тапһа, ҡайтыр, тапмаһа үлер”, – тип уйлай.

Урманда егет эй йөрөй, ти, эй йөрөй, ти, һәм иҫ китмәле серле тауыш ишетә был. Ошо тауышты эҙләп бара торғас, бер өйкөм кипкән ҡурайға барып сыға, уларҙың елгә шундай моң сығарып ултырыуына

хайран ҡала. Үҙе лә береһен ҡырҡып алып, биш бармаҡ баҫа торған урын эшләп, уйнап ебәрә, ти. Уның моңон яҡындағы ауыл кешеләре ишетеп һәм эҙләп килеп, егетте табып алып ҡайтып китәләр. Бына шунан башлап кешеләр ҡурай уйнай башлағандар. Был сихри тауышта буран ыжғырыуы, ямғыр шауы, ел һыҙғырыуы, япраҡтар шыбырлауы, шишмә сылтырауы, ҡош тауыштары ла – ғөмүмән, тәбиғәт симфонияһы сағыла.

*Ошо ерҙә магнитофондан ҡурай моңон тыңлайбыҙ.*

Бына ниндәй тылсымлы музыка ҡоралыбыҙ бар икән!

*"Ҡурай" уйыны*

Ни өсөн батша егетте үлтермәгән? (*Бер әсәнең һөтөн тәмләгәнгә бер туған булып иҫәпләнәләр, шуға үлтермәгән*)

Туғандар, күршеләр менән үҙ-ара нисек йәшәргә кәрәк? (*татыу, матур*)

Балалар, халҡыбыҙҙың боронғо музыка ҡоралдары бик күп. Улар – думбыра, ҡыл ҡумыҙ, һорнай, дөңгөр, ҡумыҙ. (*Һүрәттәрен күрһәтәм*)

Хәҙер ҡурайҙы ағастан да, еҙҙән дә эшләйҙәр. Уларҙы оҫталар тип йөрөтәләр. Мәҡәлдә лә әйтелә бит:

Ауыҙында ҡош һайратыр

Оҫтаһы бар башҡорттоң.

Оҫтаның ҡулы алтын, күңеле киң.

Ҡурайсы, йырсы кешеләр һау-сәләмәт булалар, ғүмерҙәре оҙон була, тыны оҙон, үпкәһе һау була.

3. Йомғаҡлау.

Ниндәй музыка ҡоралы тураһында һөйләштек? (*ҡурай*). Ул ҡайҙа үҫә? (*урманда*) Эйе, ул йылға буйында, тау битләүҙәрендә, яланда үҫә икән. Шуға күрә тәбиғәтте, ер-һыуҙы һаҡларға кәрәк, бысратмаҫҡа кәрәк. Шулай итһәк, моңло ҡурай күберәк үҫер.

## Аһылай (Өскүл) ауылы тирәһендәге ер-һыу атамалары
(легендалар)

Аһылай (Өскүл ) ауылы тирәһендәге ер-һыу атамаларына байҡау яһаһаң, халыҡтың күҙәтеүсәнлегенә, образлы фекер йөрөтөүенә һоҡланаһың. Бында атамалар төрлө юл менән яһалғандар һәм бирелгәндәр. Кеше исемдәренә бәйләнгәндәре лә, халыҡтың кәсебенә ярашлы бирелгәндәре лә, оноҡшаш, һыноҡшаш һүҙҙәр менән

яһалғандары ла, ваҡыт, заман менән бәйлеләре лә бик күп. Исем-атамаһы булмаған бер генә шишмә-ҡойо ла, юл-һуҡмаҡ та, тау-таш та, урман-һаҙлыҡ та юҡ. Улар халыҡ телендә йәшәп килә. Хәҙер шулар тураһында булыр әйтер, еткерелер һүҙ.

**Биҙгенде ҡойоһо**

Өскүл күленән баш алып, ҡамышлы-күтерле ярҙарына һуғыла-һуғыла көньяҡҡа йүгереүсе һәм Йәнекәй ауылы янында Кесе Ҡыҙыл йылғаһына ҡойоусы йылға ул – Биҙгенде. Исеме лә «биҙеү» һүҙенә бәйле. Сөнки уның үҙәне күтерле, батҡаҡлы, батҡыл, йәйен-ҡышын мал-тыуарҙы алып ҡына тороуына ҡарап бирелгән был исем. Элек ул мул һыулы, шәп ағыусы йылға булған. Халыҡ уның ярҙарындағы күтерҙе, тирә-яҡ ауыл кешеләре менән өмә яһап, таҙартып торған. Йылғаны быуып, һыу тирмәне тотҡандар. Ағым түбәнендә лә бер нисә тирмән булған. Тирмәнсе булып Нәҙерғол исемле кеше эшләгән, урыҫтар уны Назар тип йөрөткәндәр һәм аҙаҡ был исем Назаркино булып ауылға күскән.

**Өскүл ҡыры йәки Суҡтал тауы**

Биҙгенде йылғаһы аръяғындағы тауҙы Баттал, Оҙонгүл ауылдары халҡы Өскүл ҡыры тауы тип һөйләйҙәр. Элек ул шулай аталған да. Ваҡ-ваҡ түбәләрҙән, емеш-еләкле болондарҙан, таллы-муйыллы үҙәктәрҙән торған Өскүл ҡыры тауының һәр үҙәгенең, шишмәһенең үҙ атамаһы булған. 1906 йылғы Мәфтуха өләсәй һөйләүенсә, тауҙың муйыллы һәм баланлы үҙәген Кинйәбай һаҙы, таллы үҙәген Суҡтал үҙәге, ваҡ-ваҡ түбәләрҙән торған урынын Ваҡтүбә араһы тип йөрөткәндәр. Тауҙы Өскүл ҡыры тип бик оло кешеләр генә әйтә хәҙер, ә ҡалғанлдар өсөн ул тау – Суҡтал тауы. Бер үҙәктең исеме бөтә тауға күскән дә ҡуйған, исем үҙәктең үҙенсәлегенә ҡарап бирелгән.

Аһылай (Өскүл ) ауылының йәйләүе булған урын – **Кесерткән** тауы.

Оҙон ҡыш үтеп, ер өҫтө яңы морон төрткән йәш үлән, гөл-сәскә менән ҡапланған бер осорҙа, ҡыш буйы кәртәлә зарығып торған малдарын әйҙәп, ауыл халҡының бар хәллеләре Кесерткән тауына йәйләүгә үрләгән. Кешеләр өсөн дә, мал-тыуар өсөн дә бик уңайлы булған бында. Тауҙың көнсығышы текә ташлы ҡаяларҙан, өҫтө һутлы үләнгә бай болон-туғайҙарҙан тора. Болондары һарынаға, тау ҡымыҙлығына, ат, һыйыр йыуаларына, башҡа яҡтарҙа булмаған оҫҡон йыуаһына мул була, үҙәктәрендә муйылы, ҡарағаты, баланы күҙ яуын алып ултыра. Ошондай хозур ерҙә байҙар тирмә ҡороп,

ярлылары ҡыуыш ҡороп, күкрәктәрен тултырып саф һауа һулап, емеш-еләк йыйып, бейә бәйләп, ҡымыҙ эсеп хәл алғандар. Йәй үткәнсе, һөйрәлеп килеп еткән мал-тыуар уйнаҡлап, йылҡылдап торған. Көҙгә табан малдарҙы яңы көтөүлеккә ҡыуғандар, йәғни, халыҡ көҙгө йортҡа күскән. Берәүҙәренең көҙгө йортҡа Эреғарағас яланына (хәҙер Кәбәнташ яланы), икенселәре Йәрембәт яланына күскән. Бында улар ҡырпаҡ ҡарға тиклем булғандар. Тәүге ҡар менән бергә Ҡыштау еренә күсеп килгәндәр. Өскүлдең Ҡыштау ере хәҙерге Алтын яланында булған. Йәйләү урыны булған Кесерткән тауына исем уның үҙенсәлегенә ҡарап бирелгәндер, моғайын. Бер кемдән дә анығ ҡына мәғлүмәт алып булманы.

***Мелекесова Е.В.,***
*Асҡар ауылы "Ҡайынҡай" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе*

**Кәкүк сәйе**
(урта төркөм өсөн)

*Ҡурай моңо ағыла, сәхнәгә оло инәй һәм балалар сығалар.*

Оло инәй: Һаумыһығыҙ, килгән ҡунаҡтар! Һеҙҙе яҙ байрамы – Кәкүк сәйе менән ҡотлайым. Йәгеҙ, балалар, тәмле сәй ҡайнағансы, матур табын ҡоролғансы, шиғыр һөйләп, йырҙар йырлап, йомаҡ ҡойоп алайыҡ.

1-се бала:
Ҡар һыуы китте инде,
Ерҙәр ҙә кипте инде,
Кәкүк сәйенә яланға
Сығыр мәл етте инде.
2-се бала:
Яланда бигерәк тәмле
Сәк-сәк, бәлеш, бауырһаҡ.
Етте, сығып яланға,
Кәкүк сәйе эсер саҡ.
3-сө бала:
Аҡ самауыр ҡуяйыҡ,
Тәмле булһын сәйебеҙ,
Кәкүк сәйен байрам иткәс,
Матур килер йәйебеҙ.

4-се бала:
Изге теләк теләйек,
Уйнайыҡ та, йырлайыҡ,
Матур шиғыр һөйләйек –
Аптырашып тормайыҡ.

Оло инәй: Афарин, балалар! Ни өсөн Кәкүк сәйе байрамын үткәрәләр, ә һандуғас йәки һабан турғайы сәйе түгел?

*Балаларҙың яуаптары.*

Оло инәй: Борон-борондан башҡортар ҡош-ҡортҡа табынып йәшәгән. Ҡарға, кәкүкте кешеләргә изгелек килтереүсе ҡоштар тип иҫәпләгән халҡыбыҙ. Шуға бағышлап байрамдар үткәргәндәр. Уларҙан йәйҙең матур килеүен, игендең ишелеп уңыуын һорағандар. Кәкүк сәйен кәкүк саҡыра башлағас, кәкүк емеше сыҡҡас үткәргәндәр.

Әйҙәгеҙ, балалар, ҡоштар тураһында йомаҡ ҡояйыҡ. Тыңлағыҙ.

Көндөҙ уның күҙе һуҡыр,
Әллә тығылған бөкө.
Тонон һунарға сыға,
Шар күҙле матур... *(өкө)*
Тыуған яҡҡа бик тоғро ҡош,
Ҡайҙа ғына ул тормай,
Күктә, ерҙә, хатта өйҙә,
Кинәнеп уйнай ... (*турғай*)
Ҡаяларҙан һауаларға
Йәйеп оса ҡоласын,
Бөркөт кеүек ҡыйыу ҙа ул,
Матур ҙа ул... (*ыласын*)
Йыр моңдарға күмә ерҙе,
Илаһи мәл – таң тыуғас,
Тәбиғәткә сикһеҙ ғашиҡ,
Һоҡланғыс ҡош... (*һандуғас*)
Ҡар ҙа ҡар, тип осоп йөрөй,
Ҡысҡыра юҡҡа-барға,
Үҙе уғры, үҙе яһил,
Исеме уның... (*ҡарға*)
Тауҙар иле – уның ере,
Бармай бер ниҙән өркөп.
Ҡурҡыу белмәҫ был дәү ҡоштоң

Исеме булыр... (*бөркөт*)

Афарин, балалар! Ҡоштар тураһында күп беләһегеҙ икән. Ҡоштарҙы яратаһығыҙмы?

Балалар: Эйе, инәй. Ҡышын уларға ем һибәбеҙ, тағараҡтар эләбеҙ.

*Кәкүк саҡырыуы ишетелә. Бер бала кәкүк кейемендә килеп сыға.*

Кәкүк: Һаумыһығыҙ! Мин һеҙгә именлек алып килдем!

Оло инәй: Уң ҡолаҡ менән ишеттегеҙме, һул ҡолаҡ менәнме?

Балалар: Уң ҡолаҡ менән, уң ҡолаҡ менән ишеттек.

Оло инәй: Тәүге кәкүк тауышын уң ҡолаҡ менән ишетһән, гел яҡшылыҡ ишетәһең. Кәкүк ауылға осоп килһә, аслыҡ була, ти, торғайны ололар. Шуға күрә ҡырға сыҡҡан ыңғайы ағас төбөнә аҡ ризыҡ – һөт, ҡатыҡ ҡойғандар, теләк теләгәндәр.

*Балалар оло инәй менән ағас төбөнә һөт, ҡатыҡ ҡуялар.*

5-се бала:
Илгә именлек килһен,
Күктән изгелек булһын,
Көндәр һәр саҡ матур тороп,
Иген ишелеп уңһын.

6-сы бала:
Һаумы, кәкүк ҡошҡайым,
Ҡасан килден, дуҫҡайым?
Емештәрен бик тәмле,
Моңло ла тауышҡайың.

7-се бала:
Тыңла кәкүк тауышын,
Әйтер ғүмер ағышын,
Әйтер үҙе һағышын,
Уйландырыр яҙмышың.

Оло инәй:
Балалар, үҙебеҙ яратҡан уйындарҙы уйнайыҡ.

*“Аҡ тирәк, күк тирәк”, “Тирмәкәй”, “Ат сабышыу” уйындары уйнала.*

Оло инәй: Афарин, балалар! Хәҙер бергәләшеп “Косилка-молотилка” йырын йырлайыҡ.

Бөтәһе бергә: Әйҙәгеҙ!

*“Косилка-молотилка” йыры*

Оло инәй: Беҙ уйындар уйнап, йырҙар йырлап, күңел асҡансы, кәкүк сәйе лә әҙер булды. Әйҙәгеҙ, балалар, сәй эсергә ултырайыҡ.

***Мөхәмәтшина А.И.,***
*Йәнгел ауылы “Ҡояшҡай” балалар баҡсаһының музыка етәксеһе*

**Башҡорт халҡының музыка ҡоралы – ҡумыҙ**
(өлкәндәр төркөмө өсөн)

Бурыстар:

1. Башҡорт халҡының музыка ҡоралдарының береһе ҡумыҙ менән танышыу. Ҡумыҙ төрҙәре, ҡумыҙсылар тураһында мәғлүмәт биреү;
2. Бәйләнешле телмәр үҫтереү;
3. Башҡорт фольклорын өйрәнергә теләк уятыу.

**Дәрес барышы**

Кире йөҙәс, бире йөҙәс
Кирле-мырлы һикерә.
Һикереп тимер тәртәлә
Йөрәккә моң еткерә.

Балалар, был шиғырҙа ниндәй музыка ҡоралы тураһында һүҙ бара?

Беҙ бөгөн башҡорт халҡының иң бороңғо музыка ҡоралдарының береһе – ҡумыҙ менән танышырбыҙ. Ул – уртаһында теле булған дуға формаһындағы металл. Борон ағастан, тимерҙән, хатта ҡаҙ һөйәгенән эшләнгән ҡумыҙҙар булған. Иң элек уны ағастан яһағандар. Саған ағасын бысаҡ ярҙамында юнып, 15-20 см ҙурлығында пластинка эшләп, еләҫ урында киптергәндәр. Уртаһына, ҡумыҙҙың телен юнып, эшләп ҡаты еп беркеткәндәр. Уйнағанда ошо епте бармаҡҡа урап тартҡандар һәм матур тауыш килеп сыҡҡан.

*Легенда һөйләү*

Был бәләкәй генә нескә музыка ҡоралы тураһында бик күп легендалар йөрөй. Ошонан сығып, ҡумыҙҙы фәҡәт башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының музыка ҡоралы булған тигән һығымта яһап була. Сөнки борон дин буйынса ҡатын-ҡыҙға ҡысҡырып көлөү, йырлау, тыпырлап бейеү тыйылған булған. Улар яңғыҙ ҡалған саҡтарында ҡайғыны ла, шатлыҡты ла ошо бәләкәй музыка ҡоралы менән йыуатҡандар. Кәрәкмәгән ваҡытта йәшереү өсөн бик ҡулай инструмент булған.

Хәҙер мин һеҙгә ҡумыҙҙа таҡмаҡтар уйнап ишеттерәм.

*Ҡумыҙҙа таҡмаҡтар уйнау. Ял минуты.*

Һай, ҡумыҙ! Һай, ҡумыҙ!
Ҡумыҙҙар сыңлай икән.
Өҙә баҫып бейемәй(ен)сә,
Күңелдәр булмай икән.

Ҡумыҙ – ул варгандың бер төрө. Ул һуҡма телле музыка ҡоралы тип атала. Ә ни өсөн һуҡма телле икән? (*Балаларҙың яуаптары)*

Хәҙерге ваҡытта ҡумыҙҙарҙың төрлө төрҙәре була

1. Бер телле ябай ҡумыҙ;
2. Ике телле ҡумыҙ (тауыш яңғырашы арта);
3. Өс тауышҡа күсеп уйнай торған ҡумыҙ;
4. Һигеҙ тауышлы ҡумыҙ;
5. Тауышлы ҡумыҙ (бас гитара, контрабас, тромбон тауыштарын да алыштыра ала икән).

Бик боронғо ағастан эшләнгән ҡумыҙ 1985 йылда Мәсетле районында Гарипова Ҡәфиә инәйҙә табыла. Был ҙур асыш була.

*Ағас ҡумыҙҙың тауышын тыңлау*

Алдан әйтеүемсә, ҡумыҙ ул фәҡәт башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының музыка ҡоралы булған. Һуңғы ваҡытта был музыка ҡоралында ҙур популярлыҡ менән ир-егеттәр ҙә сығыш яһай. Мәҫәлән, беҙҙең атаҡлы ҡумыҙсыбыҙ Роберт Заһретдинов һәм уның уҡыусыһы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов.

Балалар, ҡумыҙҙа уйнауҙан тыш, ошо матур музыка ҡоралы ярҙамында төрлө имитация алымдары, тәбиғәт күренештәре, йәнлектәр, ҡоштар тауыштарын ишеттереп була икән.

*Аудиояҙма тыңлау*

Балалар, ҡумыҙға ҡушылып таҡмаҡтар әйтешәйек.

*Таҡмаҡ әйтеү*

Әйҙә, ҡумыҙҙа уйна ла,
Әйҙә, моңланып йырла.
Үҙ телеңдең ҡөҙрәтен бел,
Һис тә оялып торма.
Һай, ҡумыҙ! Һай, ҡумыҙ! Һай, ҡумыҙ!
Ҡумыҙҙар сыңлай икән.
Өҙә баҫып бейемәй(ен)сә,
Күңелдәр булмай икән.

*Тел төҙәткестәр өҫтөндә эш*

Ҙа-ҙа-ҙа, ҙа-ҙа-ҙа!
Мин уйнайым ҡумыҙҙа.
Ҙы-ҙы-ҙы, ҙы-ҙы-ҙы!
Милли башҡорт ҡумыҙы.
Шы-шы-шы, шы-шы-шы!
Ҡайһылай матур тауышы.
Рә-рә-рә, рә-рә-рә!
Зыңғыр, зыңғыр һикерә.
Рә-рә-рә, рә-рә-рә!
Йөрәккә моң еткерә.
Тан-тан-тан – борон булған ағастан,
Ған-ған-ған – олатайым яһаған.
Ар-ар-ар – ҡумыҙ сиртә бармаҡтар,
Ар-ар-ар – бейеп китә аяҡтар.
Ҡумыҙҙың һаулыҡ өсөн әһәмиәте.

Ҡумыҙ сирткәндә тын ярҙамында уйнағанлыҡтан, үпкәләр һау була, теш ҡаҙналары ныҡ, тештәр һау була, сөнки ҡумыҙ вибрация бирә һәм теште нығыта. Ә инде бармаҡ менән сиртеп уйнағанлыҡтан, бармаҡ остарындағы нервы күҙәнәктәренә күнекмәләр яһала.

Йомғаҡлау.

Мәңге йәшәр халҡым ҡоралдары,
Ул башҡорттоң йәшәй аңында,
Ул халҡымдың йәшәй булмышында,
Ул халҡымдың йәшәй ҡанында.

## Мин – мәргән

(мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн)

Бурыстар:

1. Милли спорт төрөн тергеҙеү;
2. Мәргәнлекте, ҡул хәрәкәтенең етеҙлеген, ҡараш ярҙамында аралыҡты билдәләү һәләтен, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү;
3. Балалар күңелендә милләтебеҙгә, тыуған ергә ҡарата оло һөйөү, ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү.

## Сара барышы

*Тирмә ҡоролған. Тирмә тышында кейеҙ түшәлгән һәм бәләкәй ҡыҙ бала ҡурсаҡ уйнап ултыра. Янында апаһы түбәтәй сигә.*

Ға-ға ға – әйҙә киттек урманға,
Шә-шә-шә – урманда еләк бешә,
Ле-ле-ле – ауыҙ итәйек әле,
Ге-ге-ге – ҡалай тәмле еләге.

Апай: Бына бит телең дә шымарып бара. «Бала яҫтыҡта ятһа, ҡоштай сос була», – тигән әйтем бар. Әйҙә әле бишек йырын көйләп, ҡурсағыңды йоҡлатайыҡ та уйнарға сығайыҡ.

Ҡыҙ: Әйҙә, апай.

*Йырлайҙар*

Әлли-бәлли, бәпкәһе!
Ҡайҙа киткән әсәһе?
Иламаһын, йоҡлаһын,
Фәрештәләр һаҡлаһын.
Әлли-бәлли, бәү, бәү!

*“Ай-һай, Салауат” йырын йырлап, тал сыбыҡтарын ат итеп ярышып, малайҙар инә.*

1-се малай:
Егет булһа, мут булһын!
Ике күҙе ут булһын.

2-се малай:
Батыр егет – яу күрке,
Сәсән егет – дау күрке!

3-сө малай:
Малайҙар, әйҙәгеҙ, ярышты башлайыҡ!

Бөтәһе: Әйҙәгеҙ!

Бәләкәй малай: Ағайҙар, ағайҙар, көтөп тороғоҙ, минең дә ярышҡым килә!

5-се малай: Әйҙә, “Ятып ҡалғансы, атып ҡал”, тигәндәр. Әйҙә, һин дә мәргәнлектә үҙеңде һынап ҡара.

6-сы малай: Туҡта, туҡта, ырыуыңды тамғаңды беләһеңме икән? Әгәр дөрөҫ әйтһәң, ярышырһың.

Бәләкәй малай: Ырыуым – тамъян, ҡошом – ҡарға,
Ағасым минең – тирәк,
Ҡыҙыл һымаҡ сихри йылға
Был донъяла бик һирәк.
Бәлә-ҡаза килгән саҡта
“Тутыя!” – булған оран.
Мал-тыуарға, ҡаралтыға

“Ырғаҡ” тамғаһы булған.

Бөтәһе: Һай, афарин!

Бәләкәй малай: Ағай, ярышайым инде, ә?

7-се малай: Әйткән һүҙ – атҡан уҡ! Уҡ-һаҙағыңды әҙерлә, ҡустым.

1-се ҡыҙ: (Зөһрә) Малайҙар, бөгөн сәпкә уҡ атыу буйынса ярыш була тигәнде ишетеп, мин дә әҙерләнеп килдем.

1-се малай:

Зөһрә, Зөһрә,

Тау битенән йүгерә.

Мунса күрһә – абына! *(үсекләшеү)*

Зөһрә: Ҡарап ҡарарбыҙ, кемебеҙ абыныр икән! Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының саялығын, мәргәнлеген онотмағыҙ. Маянһылыу кеүек үҙ илебеҙҙе, еребеҙҙе һаҡларға беҙ ҙә һәр саҡ әҙербеҙ!

Бәләкәй малай: Ярай инде, ярышты тиҙерәк башлайыҡ!

*Түмәр өҫтөнә баҫып “уҡ” аталар, бер-берелән дәртләндерәләр. Ҡыҙҙар сыға.*

– Һай, афарин !
– Етеҙерәк бул!
– Кәүҙәңде төҙөрәк тот!
– Уғыңды дөрөҫ төҙлә!

Бәләкәй малай:

Әлеү, әллеү (*илай*). Мин ҡулымды ауырттырҙым! Ҡаны сыҡты!

2-се ҡыҙ: Илама, илама! Хәҙер беҙ уны юл япрағы менән бәйләп ҡуябыҙ, тиҙ генә бөтөрә ул (*тирмә артынан юл япрағы алып, ҡулын бәйләй*).

Әпсен-төпсөн,

Бесәй үпһен!

Әпсен-төпсөн,

Бесәй үпһен! (*имләү*)

Бына шулай, хәҙер бөтә.

Бәләкәй малай: Рәхмәт, апай.

2-се малай.

Ҡурҡмаҫ булһа ирҙәр яранан,

Уҡ та үтмәҫ беҙҙең аранан!

3-сө малай: Малайҙар, был ярышта Азамат иң мәргәне булып сыҡты!

3-сө ҡыҙ (*түбәтәй сигеүсе ҡыҙ*): “Атанан күргән – уҡ юнған,

әсәнән күргән – тун бескән”, – тигәндәр. Һин дә, Азамат, атайың Моразым ағай кеүек мәргән икәнһең! Мин һиңә үзем нағышлап сиккән ошо түбәтәйзе бүләк итәм (*түбәтәй кейзерә*).

Азамат: Зур рәхмәт! Мин – мәргән! (*кул сабалар*)

4-се ҡыз: Бына бит: “Ағас күрке – япраҡ, әзәм күрке – сепрәк”, – тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Ҡайһылай килешә үзеңә, йөзөң асылып китте!

5-се ҡыз: Ә һез сәпкә уҡ атыузың әһәмиәтен беләһегезме һуң?

4-се малай: Әлбиттә, “Йәйәләрзән уҡ аттым – беләктәрзә көс таптым”, – тигәндәр. Тимәк, уҡ атҡан кеше көслө була.

5-се малай: Арҡа һөйәген, кәүзәне төз тоторға, мыҡты булырға ярзам итә.

6-сы малай: Сәпкә төбәлгән ваҡытта ҡараштың бер яҡынға, бер алыҫҡа күсереү күреү һәләтен яҡшырта.

7-се малай: Атайым әйтә, уҡтарзың да төрлө төрзәре бар, ти. Иң алыҫҡа атыла торған еңел озон уҡ – зөлфөн йәки серем, мәрәйгә ата торғаны – майтус, башағы иң ослоһо – бөрөз, ә башағы ялпаҡ булһа – ҡырҡҡы, башаҡһызы – тупан уҡ була икән.

6-сы ҡыз: Бына бит күпме ҡызыҡлы нәмәләр белдек! Әйзәгез, уйнап, йырлашып алайыҡ!

*“Ҡурай” уйынын йырлап бейеү*

7-се ҡыз: Ҡыззар, малайзар ямғыр килә бит!

8-се ҡыз: Ысынлап та! Күптәнән яуғаны юҡ ине, әйзәгез, ямғыр теләйек.

Бергә:

Ямғыр, яу, яу, яу!
Иген үҫһен тау, тау!
Арыштан, бойзайзан,
Без һорайбыз Хозайзан!

Бәләкәй малай: Ҡайтайыҡ инде.

Бергә: Әйзәгез, әйзәгез!

***Мәғәфурова А. Х.,***
*Асҡар ауылы балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе*

## Әбйәлил районы Асҡар ауылы һәм уның тирә-яғындағы ер-һыу атамалары

(мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн)

Бурыстар:

1. Асҡар ауылы биләмәһендәге ер-һыу атамаларының исемдәрен өйрәтеү һәм аңлатыу;
2. Бәйләнешле телмәр, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү;
3. Тыуған яҡ тәбиғәте менән һоҡланыу, ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Дәрес барышы**

I. Инеш әңгәмә:

Һаумыһығыҙ, балалар! Кәйефтәр нисек? Мин һеҙгә бер йомаҡ әйтәм, ә һеҙ уның яуабын табырға тырышығыҙ.

Һиңә лә йәбешкән, миңә лә йәбешкән, уға ла йәбешкән, йәбешкәнгә лә йәбешкән. Беҙҙең бәтәбеҙҙең дә нимәһе бар?

Балалар: Исемебеҙ бар!

Эйе, дөрөҫ! Беҙҙең бөтәбеҙҙең дә исемебеҙ бар. Бына һинең исемең – Ильназ, һинеке – Карина, ә минеке – Айһылыу.

Бына һеҙҙең өйөгөҙҙә бесәй йәки этегеҙ, быҙауығыҙ, кәзәгеҙ, һыйырығыҙ бармы? Уларға исем ҡуштығыҙмы? Ниндәй исемдәр ҡуштығыҙ?

Бына шулай, кешеләрҙең, йорт хайуандарының ғына түгел, башҡа йәнһеҙ нәмәләрҙең дә исемдәре була икән. Беҙ ниндәй ауылда йәшәйбеҙ? (*Яуап: Асҡар ауылында*)

Асҡар ауылы ниндәй районда урынлашҡан? Ни өсөн беҙҙең ауыл Асҡар, районыбыҙ Әбйәлил тип аталған икән?

II. Маҡсатҡа сығыу:

Балалар, беҙ был дәрестә беҙҙең ауыл, район исеме ҡайҙан килеп сыҡҡаны тураһында белербеҙ. Шулай уҡ үҙебеҙҙең ауыл янындағы тау, йылға, күл исемдәре менән дә танышырбыҙ.

Ауыл, район, ҡала, тау, йылға, күл, урман, ялан исемдәре ер-һыу атамалары, икенсе төрлө топонимдар тип атала.

(*З. Фәйзуллинаның “Әбйәлил” йырын тыңлау*)

III. Яңы тема өҫтөндә эш.

Әнүәр Әсфәндиәров тигән ғалим “История сёл и деревень” (Уфа, 2009) китабында *(китап күрһәтелә)* беҙҙең ауылдың, шулай уҡ районның ни өсөн шулай аталыуын былна ошолай аңлатыла: “XVIII быуаттың 30-40-сы йылдарында Таңатар йылғаһы буйына Асҡар Бейешев тигән кеше килә һәм өй һала. Шунан ул урында барлыҡҡа килгән ауылды Асҡар тип йөрөтә башлайҙар”.

Был ауылды тәүҙә Әбйәлил тип атаған булғандар. Сөнки Асҡар Бейешевтан саҡ ҡына алда Әбйәлил Яҡшыбаев тигән кеше лә, үҙенең ғаиләһе менән ошо беҙҙең ауыл булған урынға күсеп килеп, йорт һалған була. Асҡар ҙа, Әбйәлил дә – икеһе лә 1761 йылда тыуған. Аҙаҡ Әбйәлил Яҡшыбаевтың исемен беҙҙең районға ҡушҡандар.

Бына ни өсөн беҙҙең ауылды Асҡар, ә районыбыҙ Әбйәлил тип атала икән.

*Таңатар йылғаһы исеменең килеп сығышы*

Элек беҙҙең өләсәй, инәйҙәр көйәнтәләп таң һыуына барыр булғандар. Сөнки таң атҡан саҡта һыу алып ҡайтһаң, ул һыу шифалы, файҙалы була. Ул һыуҙы эскән кеше ауырымай, тип уйлағандар. Шуға ла был йылғаны Таңатар тип атағандар.

*Иҙәш йылғаһы исеменең килеп сығышы*

– Балалар, беҙҙең Асҡарға яҡын тағы ниндәй йылғалар бар?

– Иҙәш йылғаһы бар.

– Элек ул йылға буйында муйыл, ҡарағат, ҡурай еләге күп була торғайны. Ә хәҙер уларҙы һыйыр, быҙау, һарыҡ-кәзәләр йөрөп ашап бөткән. Тәбиғәтте һаҡларға кәрәк, балалар! Иҙәш йылғаһының исеме бына ошо китапта *(“Словарь топонимов БАССР” тигән йәки башҡа китапты күрһәтә)* “исток верховья, йәғни йылға башы тигәнде аңлата”, тип яҙылған. Йәғни, беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙ йылғаның башланған урынын күргәндәр ҙә шуны йылғаға исем итеп ҡушҡан да ҡуйғандар һәм йылғаны Иҙәш тип атай башлағандар.

*Ҡыҙыл йылғаһы исеменең килеп сығышы*

– “Ҡыҙыл” һүҙе нимәне аңлата? (*балаларҙың яуаптары*) Эйе, дөрөҫ, ҡыҙыл төҫтө аңлата, русса “красный” була. Балалар, хәҙер мин һеҙгә бер әкиәт уҡыйым. Унда Ҡыҙыл йылғаһының ни өсөн шулай аталыуы хаҡында һүҙ бара. Һеҙ иғтибар менән тыңлап ултырығыҙ.

Борон-борон заманда башҡорттар йәшәгән ергә башҡа яҡта йәшәгән халыҡтар ныҡ ҡыҙығып, көнләшеп ҡараған. Сөнки беҙҙең тыуған еребеҙҙә матур-матур йылғалар, бейек-бейек тауҙар, киң яландар, үтә күренмәле күлдәр – барыһы ла бар. Шуға ла сит яҡтың

кешеләре был ерҙәрҙе баҫып алып, үҙҙәренеке итеү тураһында хыялланғандар. Ә башҡорттар, ерҙәрен һаҡлап, яу сапҡан һәм уны бер кемгә лә бирмәҫ өсөн йән аямай көрәшкән.

Бер ваҡыт сит яҡтың кешеләре беҙҙең тыуған төйәгебеҙгә баҫып ингән һәм бик ҡаты һуғыш башланған. Шул һуғыш-алыштырҙа күп кешенең үлеүенә тәбиғәт тә ныҡ ҡайғырған, асыуланған, ти. Шул саҡ ныҡ итеп күк күкрәгән. Күк күкрәгән саҡта бер бейек ҡая тау башында ятҡан ҙур ҡыҙыл таш аҫҡа тәгәрәп төшкән, ти. Был ҡыҙыл таш төшкән урындан һыу сыға башлаған һәм артабан ағып киткән.

Ул йылға ерҙә ятҡан батырҙарҙың ҡанын йыуғанға ҡып-ҡыҙыл булып аҡҡан, ти. Шунан башлап таш төшкән урындан сыҡҡан йылғаны Ҡыҙыл йылғаһы тип атай башлағандар.

*Сөйөнтапҡан йылғаһы исеменең килеп сығышы*

Беҙҙең ауылда Сөйөнтапҡан тигән йылға бар. Ә ни өсөн уны шулай тип атағандар икән? Нимә була ул Сөйөн *(сөй түгел)?* Баҡһаң, балалар, был йылғала суйын тип аталған ҡаҙылма таштар табылған. Уларҙы икенсе төрлө сөгөн тип тә атайҙар. Бына шул суйын тигән һүҙҙе кешеләр әҙерәк үҙгәртеп, Суйынтапҡан тип атай башлағандар, йәғни ул йылғала бер кеше суйын тигән ҡаҙылма байлыҡ – ҡаты таш табып алған. Ә ул ташты эшкәртеп, бына ошондай суйын көршәктәр, табалар эшләгәндәр *(экранда суйын һауыттар күрһәтелә).*

Ниндәй тауҙар бар беҙҙең Асҡар ауылы эргәһендә?

*Алмас тауы исеменең килеп сығышы*

Нимә була ул алмас? Алмас – бына ошондай матур таш була! (*Ураҙы тауында табылған алмас ташын күрһәтергә).* Унан төрлө матур-матур биҙәүестәр – һырғалар, балдаҡ-йөҙөктәр эшләгәндәр. Элек беҙҙең больница урынлашҡан тауҙа бына ошондай матур таштар табылған, шуға уны Алмас тауы тип атағандар, тип аңлата өлкән кешеләр.

*Ҡоръятмаҫ тауы исеменең килеп сығышы*

Ҡоръятмаҫта, тау һырты булғас, һәр ваҡыт ел өрөп тора. Шуға күрә ул тауҙа ҡар ятмай, сөнки ҡарҙы ел осороп алып китеп тик тора. Бына шулай ул тауҙа ҡар ятмағанға, тауға Ҡаръятмаҫ тау тигән исем ҡушҡандар. Аҙаҡ ул тау Ҡоръятмаҫ булып киткән. *(Экранда Ҡоръятмаҫ тауы күрһәтелә)*

Беҙҙең Әбйәлил районында иң бейек тау нисек атала? (*Балаларҙың яуаптары*) Дөрөҫ, ул тау Ҡырҡты тип атала. *(Экранда Ҡырҡты тауҙары панорамаһы күрһәтелә)*

Ни өсөн шулай Ҡырҡты тау тип атағандар икән уны? Ҡырҡты һүҙен нисек аңлайһығыҙ? Ҡырҡыу – резать.

Баймаҡ районы яғынан беҙҙең Әбйәлил районына табан һуҙылған Ирәндек тауҙарын Ҡыҙыл йылғаһы, ҡырҡҡан һымаҡ итеп, икегә бүленеп аға. Шуға күрә Ҡыҙыл йылғаһының һул яғындағы тауҙар теҙмәһе Ирәндек тип, ә уң яҡтағы тауҙарҙы Ҡырҡты тип атағандар. Шулай итеп, был тау исеме ҡырҡыу *(резать)* тигән һүҙҙән килеп сыҡҡан.

Дәресте йомғаҡлау:

Балалар, һеҙ бөгөн ниндәй топонимдар тураһында мәғлүмәт алдығыҙ?

***Өмөтбаева Г.Р.,***

*Асҡар ауылы балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе*

## «Ҡырҡ таш» уйыны

Был уйынды 2-3 бала менән уйнарға була. Йәй көнө һыу инергә барғанда ташлыҡтан төрлө-төрлө матур таштар эҙләп алырға кәрәк. Уларҙың араһынан иң шымаларын, матур төҫлөләрен йә матур формалыһын һайлап алабыҙ. Бөтәһе ҡырҡ бөртөк булырға тейеш. Таштарҙың иң ҙуры “баш таш” тип атала, ҡалған таштар – “аттар”. Һәр бала ошо өйөрҙән үҙенә “ат” менән “ҡолон” һайлап ала. Һанашмаҡ буйынса уйынсыларҙың тәртибен билдәләйбеҙ. Беренсе уйынсы таштарҙы усына йыйып ала ла өҫкә ырғыта, таштар кире төшкәндә йәһәт кенә тәүҙә ҡулының һырты менән уларҙы тоторға тырыша, икенсегә таштарҙы өҫкә ырғытып ус менән тота. Әгәр бала бер ташты ла тота алмаһа, уйнарға сират икенсе балаға күсә. Уйын барышында иң беренсе баш ташты һәм үҙеңдең ат менән ҡолоноңдо тотоп алырға тырышырға кәрәк, ҡалған аттарҙы ла эләктерергә була. Кем бөтә аттарҙы ла тотоп бөтә ала, шул еңеүсе була. Һинең атың йә ҡолоноң күршеңдә, ә уныҡы һиндә булһа, алыштырышырға була, тик атты атҡа, ҡолондо ҡолонға. Баш ташты ат менән ҡолонға алмаштырырға була. Әгәр һинең аттарыңды икенселәр тотһа, ә һинең ябай таштарың күп булһа, уларҙы ла атҡа алмаштырып һатып алһаң

була: ат 5 таш, ҡолон 3 таш тора. Алыш-бирештән һуң һәр бер уйынсының аттары үҙҙәренең хужаларына ҡайтып бөтһә, кемдә нисә ябай таш ҡалғанын һанарға кәрәк. Был осраҡта кемдең ташы күберәк, шул еңеүсе була.

Уйындың төрлө төбәктәрҙә төрлө варианттары бар: кемдәрҙер тик аҡ таш менән генә уйнай, ҡайҙалыр күберәк уйынсылар ҡатнаша. Таштар ныҡ сәселеп китмәһен өсөн балаҫта йә түшәк йәйеп, шуның өҫтөндә ултырып уйнау йәтешерәк булыр. 5-6 йәшлек балаларҙы был уйынға өйрәткәндә үҙҙәренең "аттарын" иҫтәренә тиҙерәк ҡалдырһын өсөн мин таштарҙы төрлө төҫтәргә буяным. Тәүҙә нисек итеп таштарҙы ипләп кенә ырғытып ус менән тоторға, аҙаҡ ҡулдың һырты менән тоторға өйрәттем. Балалар уйнарға оҫтарып алғас, таштарҙы алмаштырҙым.

***Рәхмәтуллина Л.Ғ.,***
*Асҡар ауылы "Миләш" балалар баҡсаһының музыка етәксеһе*

## Бишек йыры

(урта төркөм өсөн)

Бурыстар:

1. Бишек йырҙарын өйрәтеү, тыңлау;
2. Бишек йырҙары аша балаларҙың психологик сәләмәтлеген нығытыу;
3. Балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү.

### Дәрес барышы

*Балалар бергәләп һөйләйҙәр.*

Һаумыһығыҙ, тип башлайыҡ әле,
Күрешеү бит шулай башлана.
Һеҙҙең менән осрашҡанға, өләсәйҙәр,
Күңелебеҙ шундай шатлана.

Тәрбиәсе: Донъяға тыуған һәр сабыйҙы матур теләктәр менән ҡаршы алалар.

1. Төклө аяғың менән, сабыйым.
2. Сөбханалла-машалла!
3. Бәхетең-тәүфиғың менән кил, балаҡай.
4. Изге сәғәттәрҙә, ризыҡтарың киң булһын!
5. Ата-әсәңә, туғандарыңа шәфҡәтле, мәрхәмәтле бала бул!

Һәр ата-әсә балаһының бәхетле, әҙәпле, тәртипле булып үҫеүен теләй. Шуға күрә уны бишектә ваҡытта уҡ тәрбиәләй башлай. Нисек тәрбиәләй?

Балалар: Бишек йырҙары аша.

Тәрбиәсе. Дөрөҫ! Хәҙер “Сысҡан балаһы” тураһында әкиәт ҡарайыҡ. Сысҡан балаһына иғтибар итегеҙ. Ул ниндәй?

*Әкиәт сәхнәләштереү*

Сысҡан әсәй: (*Бишек йырын йырлай, музыка яңғырай*)

Йоҡла, балам, йом күҙеңде,
Әлли-бәлли-бәү.
Мин һаман да һинең янда
Әлли-бәлли-бәү!
Йоҡла, балам, йом күҙеңде,
Әлли-бәлли-бәү.
Мин һаман да һинең янда,
Әлли-бәлли-бәү!

Сысҡан балаһы: Йырлама миңә ул йырыңды.

Сысҡан әсәй: Ярай, улайһа, мин һиңә икенсе әсәй саҡырайым.

*Әсәһе сығып китә. Ат инә.*

Ат:
Ҡолонсағым, йоҡла инде,
Әсәйеңде тотма инде.
Йоҡоң туйһа, килермен,
Һоло һалып бирермен.

Сысҡан балаһы: Юҡ, миңә был йыр ҙа оҡшамай, миңә һоло кәрәкмәй!

*Ат сығып китә. Бесәй инә.*

Бесәй:
Мырау-мырау, йом күҙеңде,
Яратырмын үҙеңде.
Мин баҙарға барырмын,
Һиңә ҡаймаҡ алырмын.

Сысҡан балаһы: Был йыр ҙа оҡшамай, мин ҡаймаҡ ашамайым!

*Бесәй сығып китә, тауыҡ килеп инә.*

Тауыҡ:
Йомшағым, һарыҡасым,
Йоҡла, балам, бәпесем.
Ҡарсығаны күҙләрмен,

Һиңә тары эҙләрмен.

Сысҡан балаһы: Мин һинең бәпкәң түгел, миңә үҙемдең әсәйем кәрәк!

*Сысҡан әсәй килеп инә.*

Сысҡан әсәй:

Йоҡла, балам, бәпесем.

Йоҡла, балам, йом күҙеңде,

Әлли-бәлли-бәү!

Мин һаман да һинең янда,

Әлли-бәлли-бәү! (*Сысҡан балаһы йоклап китә)*

Тәрбиәсе: Балалар, һеҙгә сысҡан балаһы оҡшанмы?

Балалар: Юҡ, оҡшаманы!

Тәрбиәсе: Ҡайһылай тыңлауһыҙ сысҡан балаһы! Уға ат, бесәй, тауыҡ, әсәһе ниндәй йырҙар йырланылар?

Балалар: Бишек йырҙарын йырланылар.

Тәрбиәсе: Эйе, дөрөҫ. Әсәйҙәрегеҙ һеҙгә лә, бөтә күңелен биреп, бишек йырҙары йырлағандарҙыр.

Бөгөн беҙгә өләсәйҙәр ҡунаҡка килде, улар, әсәйҙәренән ишетеп, үҙҙәренең балаларына бишек йырҙары йырлағандар. Бөгөн һеҙгә лә йырлап ишеттерәләр.

*Өләсәйҙәр бишек йырҙарын йырлайҙар.*

Йом-йом, балам, йом күҙең,

Йоҡла, балам, күҙ нурым.

Шатлығым  һин, матурым,

Аҡыллым һәм алтыным.

Әлли-бәлли, тиермен,

Бәхетле бул, тиермен,

Әкиәттәр һөйләрмен,

Матур көйҙәр көйләрмен.

Тәрбиәсе. Өләсәйҙәр бишек йырын йырлағанда ниндәй иркәләү, яратыу һүҙҙәрен ҡулландылар?

Балалар: Күҙ нурым, шатлығым, матурым, алтыным.

Тәрбиәсе. Рәхмәт һеҙгә, өләсәйҙәр. Һеҙ үҙегеҙҙең аҡылығыҙ һәм һөйөүегеҙ аша балаларығыҙҙы зирәк, аҡыллы,  тәртипле һәм тәрбиәле булырға өйрәтәһегеҙ.

Ғөмүмән, бишек йырҙары кешеләргә ихтирамлы, мәрхәмәтле булырға, ата-әсәне, туғандарҙы хөрмәт итергә һәм башҡа күркәм сифаттарға өйрәтә. Мәҫәлән:

Имәндәй ныҡ бул,
Шыршылай бейек бул,
Ҡайындай аҡ бул,
Шишмәләй саф бул,
Ата-әсәле бул.
Алтын ҡанатлы бул,
Бай дәүләтле бул.
*Бергәләп ҡабатлайҙар.*

Тәрбиәсе: Әйҙәгеҙ уйнап алайыҡ. “Әлли-бәлли, бәү-бәү” тип атала был уйын.

*Уйында өс ҡыҙ ҡатнаша. Улар ҡурсаҡты йүргәккә төрә һәм сиратлап бишек йыры йырлап уны йоҡлата.*

Тәрбиәсе: Ҡайһы саҡта баланы әсәнең яғымлы, наҙлы бишек йыры ғына тынысландыра ала.

Үҙебеҙ өйрәнгән бишек йырын йырлап ишеттерәйек.

*Музыка яңғырай. “Әлли-бәлли, бәү-бәү” бишек йырын йырлайҙар.*

Тәрбиәсе: Балалар, бөгөн һеҙ нимә турһында белдегеҙ? Бишек йырҙарын ни өсөн йырлайҙар?

***Сафина Г.М.,***
*Асҡар ауылы “Сулпылар” балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе*

**Ыуыҙ ҡоймағы менән һыйлау йолаһы**
(өлкәндәр төркөмө өсөн)

Бурыстар:

1. Балаларҙы башҡорт халҡының ыуыҙ ҡоймағы менән һыйлау йолаһы менән таныштырыу;

2. Һыйыр малының ниндәй аҙыҡ-түлек менән кешеләрҙе тәьмин итеүен асыҡлау, унын йәшәү рәүеше менән таныштырыуҙы дауам итеү;

3. Балаларҙың халыҡ йолалары менән ҡыҙыҡһыныуын арттырыу, башҡортса телмәр үҫтереү.

**Дәрес барышы**

*Музыкаль залда өй эсе күрһәтелгән. Урындыкта оләсәй йөн иләп ултыра. Унын янына әсәй инә.*

Әсәй: Һөйөнсө, һөйөнсө! Һыйырыбыҙ быҙаулаған!

Өләсәй: Ниндәй ҡыуаныслы хәбәр! Һыйыр быҙаулағас, хәҙер һөтөбөҙ, май-каймағыбыҙ, эремсек, ҡоротобоҙ, ойотҡаныбыҙ булыр!

Әсәй: Мин һыйырҙың һөтөн һауып индерәйем. Һыйырҙың башлап һауған һөтө ыуыҙлы була. Ыуыҙ һөтөнән эремсек йә иһә тәмле генә ыуыҙ ҡоймағы бешерергә була.

Өләсәй: Күрше тирәләге балаларҙы саҡырып, ыуыҙ ҡоймағы менән һыйлайыҡ йылдағыса. Шул йоланы үтәһәң, һыйыр һәр йыл быҙаулап бирә, һөтө лә мул була.

Әсәй: Эйе шул, шулай итәйек! Балалар, ә һеҙ ҡоймаҡ яратаһығыҙмы?

Балалар: Эйе, яратабыҙ!

Әсәй: Ыуыҙ ҡоймағын ашағаныгыҙ бармы?

Балалар: Юҡ шул.

Әсәй: Ярай, беҙ бөгөн һеҙҙе ыуыҙ ҡоймағы менән һыйларбыҙ. Әйҙәгеҙ, яңы тыуған быҙауҙы ҡарап инәйек.

*Бер нисә бала менән сығалар.*

Өләсәй: Әй, күп йәшәгерҙәр! Тәмле ыуыҙ ҡоймағын кем яратмаҫ! Уның бер сере бар.

Балалар: Ниндәй сере?

Өләсәй: Әгәр ҙә һыйырҙың башлап һауылған ыуыҙ һөтөнән бешерелгән ҡоймаҡты ҡыҙ бала ашаһа, икенсе йыл һыйырҙың быҙауы орғасы булып тыуа. Ә инде малай кеше ауыҙ итһә, быҙау үгеҙ малы буласаҡ.

Балалар: Ҡайһылай ҡыҙыҡ! (*көлөшәләр)*

Өләсәй: Ыуыҙ һөтө һауып керетелгәнсе, мин һеҙгә йомаҡ ҡоя торайым.

*Йорт хайуандары тураһында йомаҡтар сисеү.*

*Әсәй менән бергә тышҡа сыҡҡан балалар инә.*

Әсәй: Бына һөт һауып та алдыҡ! Ә балалар быҙау менән таныштылар.

1-се бала: Быҙау бәләкәй генә!

2-се бала: Быҙау алаҡай ғына!

3-сө бала: Быҙау матур ғына, йомшаҡ ҡына!

4-се бала: Һыйыр эй быҙауҡайын ярата, ялай ҙа ялай!

Әсәй: Быҙау бит – һыйырҙың балаһы! Бөтә әсәйҙәр ҙә үҙҙәренең балаларын яраталар. Мин һеҙгә ҡоймаҡ әҙерләйем, һеҙ өләсәйгә алдан өйрәнгән шиғырҙарығыҙҙы һөйләп күрһәтә тороғоҙ.

*Балалар йорт хайуандары тураһында шиғыр һөйләйҙәр.*

Әсәй: Балалар, килегеҙ. Ыуыҙ ҡоймағы әҙер! Ауыҙ итегеҙ!

*Балалар ҡоймаҡ ашайҙар.*

5-се бала: Рәхмәт, тәмле ҡоймаҡ өсөн! Өҫтәлегеҙҙән май-ҡаймаҡ өҙөлмәһен!

6-сы бала: Һыйырығыҙҙың ағын иҫән-һау ашарға яҙһын!

7-се бала: Һыйырығыҙ һеҙҙе ҡыуандырып, йыл да быҙаулап торһон!

8-се бала: Һыйырығыҙҙың һөтө күп булһын!

Әсәй: Рәхмәт! Әйткәнегеҙ килһен!

Өләсәй: Рәхмәт яуғырҙар! Ауыҙығыҙға бал да май! Теләктәрегеҙ ҡабул булһын, балалар! Рәхмәт!

**Бәпес үҫтереү йолаһы**

(мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн)

Бурыстар:

1. Башҡорт халҡынын ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары менән таныштырыу;

2. Халыҡтың борондан килгән йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, кейеме, йыр-моҡона, бейеүҙәренә, уйындарына ҡыҙыҡһыныу уятыу;

3. Халыҡ йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре аша сәләмәт тормош тәрбиәһе биреү.

**Сара барышы**

*Төркөм бүлмәһе башҡорт йорто һымаҡ матур итеп биҙәлгән. Балалар эскәмйәләрҙә ултыралар. Кендек инәһе килеп инә. Ҡулында – бәпес итеп уралған ҡурсаҡ.*

Кендек инәһе*:* Һаумыһығыҙ, балалар! Бөгөн беҙҙә ҙур байрам: бәпесебеҙ тыуҙы! Үҙе шундай теремек кенә, күҙ теймәһен, тфү-тфү. Имен-аман тыуыуына ҡыуанып бөтә алмайбыҙ.

Уңын бир!

Йүнен бир!

Йүнен бир!

Уңын бир!

*Кендек инәһе бәпестең ҡолағына исем ҡысҡыра.*

Кендек инәһе*:* Исемһеҙ баланы бер генә сәғәткә лә сәңгелдәккә һалырға ярамай. Исеме булмаһа, бәпесте ен-пәрейҙәр алмаштыра, үҙҙәренең исемен ҡушып өлгөрә лә ҡуя, ти. Ул саҡта бала зәғиф,

ауырыу була, хатта үлеп тә ҡуя икән. Яңы мин ҡушҡан исем баланы һаҡлай. Был исемде "йүргәк исеме" йәки "тәүге исем" тип атайҙар.

Кендек инәһе: (*һамаҡлап, теләк теләй*)

Ағзаң теүәл булһын,
Аҡылың теүәл булһын,
Изге бала бул!
Мөхәммәт өммәтенән бул,
Аллаһы ҡөҙрәтенән бул!
Балаһы бар – ҡыҙы бар,
Бер ай һынлы ҡыҙы бар,
Бөтә кеше ҡыҙығыр.
Тфү-тфү, буш икән,
Ай һынлы түгел икән.
Ҡыҙы, ҡыҙы, ҡыҙы бар,
Ҡыҙы барҙың наҙы бар,
Ҡыҙы юҡтың наҙы юҡ,
Барса тундары ла юҡ.

Ә һеҙ ниндәй теләктәр алып килдегеҙ бүләккә?

1-се бала: Оҙон ғүмерле булһын.

2-се бала: Бәхетле булһын.

3-сө бала: Тиҙерәк атлап китһен.

4-се бала: Ауырымаһын, һау булһын.

5-се бала: Атаһы менән әсәһенә изгелекле бала булһын.

Кендек инәһе: Ауыҙығыҙға бал да май. Теләктәрегеҙ ҡабул булһын!

*Матур итеп кейенгән ҡыҙҙар уртаға сыға. Һәр береһенең ҡулында ҡурсаҡ.*

Кендек инәһе: Балалар, мин һеҙгә өйгә эш биргәйнем: өлкәндәрҙән һорашып, яңы тыуған бәпәйҙе нисек дөрөҫ тәрбиәләргә икәнен белеп килергә.

1-се ҡыҙ: Бәпәй тыуғас, уның аяғын ғына өлкән апаһына йәки ағаһына күрһәткәндәр. Шулай итһәң, улар татыу була. Өлкәндәре бәләкәсен яраталар.

2-се ҡыҙ: 40 көн үтмәйенсә, баланың яңғыҙын ҡалдырырға ярамай, уны ен-шайтандар алмаштырыуы бар. Берәй йомош менән сыҡҡанда, бәпәйҙең эргәһенә бысаҡ йәки ҡайсы һалырға кәрәк.

3-сө ҡыҙ: Баланың ҡулына ҡыҙыл сепрәк бәйләп, маңлайына ҡором һөртөргә кәрәк, кешеләрҙең күҙе теймәһен өсөн. Күҙ тейһә, бала ауырый, илай.

4-се ҡыҙ: Ҡашы матур үҫһен тип, ҡыҙ баланың ҡаштарын көмөш тәңкә менән һыҙып сығалар.

5-се ҡыҙ: Баланың тыуыуына ҡырҡ көн үтмәҫ элек "ҡарын сәсен" алалар. Ҡарын сәсе алынмаған баланы рәнйетергә ярамай – рәнйеше ҡаты төшә, тиҙәр.

Кендек инәһе: Афарин, аҡыллыларым! Шундай ҡайғылы хәлдәр ҙә була: ҡайһы бер кешенең балаһы тыуып тора, үлеп тора. Балаһы үлмәһен, йәшәһен өсөн дә әмәл бар.

*Кендек инәй баланы бишектән ала ла, йүгереп йөрөй.*

Кендек инәһе: Бала һатам! Бала һатам! Кем ала? Бала һатам! Кем ала?

*Алдан әҙерләнгән асылмалы тәҙрәне аса, унан атай булып кейенгән малай ҡарай.*

Атай: Мин алам! Күпме тора? Бер баш ҡолонло бейә бирәм, бирерһеңме баланы?

Кендек инәһе: Бирәм.
Бала һатам, кем ала?
Ергә һалдым – ер алмай,
Күккә сөйҙөм – ҡош алмай,
Эткә һалдым – эт алмай,
Бала һатам, кем ала?
Бала һатам, кем ала?
Атай:
Бала һатһаң, мин алам,
Нимәһе менән һатаһың?
Кендек инәһе:
Ғүмере менән һатам,
Бәхете менән һатам,
Тәүфиғе менән һатам.
Атай:
Нимәһе менән һатаһың?
Кендек инәһе:
Ғүмере менән һатам,
Бәхете менән һатам,
Тәүфиғе менән һатам.

Атай:
Нимәһе менән һатаһың?
Кендек инәһе:
Ғүмере менән һатам,
Бәхете менән һатам,
Тәүфиғе менән һатам.
Атай:
Бала һатһаң, миңә һат,
Ғүмере менән бергә һат,
Бәхете менән бергә һат,
Тәүфиғе менән бергә һат,
Бүләгенә тун бирәм,
Уға ҡушып мал бирәм.

*Атай кеше тәҙрәнән баланы ала, бишеккә һалып бәүетә.*

1-се ҡыҙ: Инәй, ә ниңә үҙ балаһын үҙе һатып ала ул?

Кендек инәһе: Уның мәғәнәһе былай: атай кеше һатып алғас, үҙенең балаһын түгел, ә кешенекен алған була бит инде. Ул шулай итеп ен-шайтандарҙы алдай.

Ә ҡайһы берәүҙәр, балалары үлеп тик торһа, яңы ғына тыуған бәпесте эттән еҫкәткәндәр һәм ялаҡандар, балаға эт еҫе һеңә. “Әйттем бит, эт тә алманы был баланы”, – тип әйткәндәр. Шунан уға йүргәк исемен Эталмаҫ тип ҡушҡандар. Ен, шайтан эт еҫен яратмай, балаға яҡын да бармай.

*Кескәй малайҙар килеп инәләр.*

Малайҙар: Һаумыһығыҙ, инәй! Һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар, малайҙар!

Кендек инәһе: Һаумыһығыҙ, малайҙар! Бәпәй күрергә килдегеҙме?

Малайҙар: Бәпес күрергә, ҡоймаҡ ашарға килдек.

Кендек инәһе: Әйҙәгеҙ, түргә уҙығыҙ! Бына бәпесебеҙ.

*Сәңгелдәктәге бәпәйгә ымлап күрһәтә. Кендек инәһе ҡоймаҡты сәңгелдәктәге бала әргәһенә ултырта. Малайҙар шул ҡоймаҡты алырға ҡулдарын һуҙһалар, сәңгелдәк әргәһендә ултырыусы Кендек инәһе уларҙың ҡулдарына таяҡ менән һуға. Малайҙар юрамал илаған булалар.*

Кендек инәй: Тағы ла тейерһеңме? Инде тағы тейерһеңме?

Малайҙар: Бүтән урламайбыҙ.

*Шунан Кендек инәһе малайҙарҙы ҡоймаҡ менән һыйлай.*

Кендек инәһе: Малайҙарҙың илағанын, ҡысҡырғанын ишетеп, күҙгә күренмәгән ен-пәрейҙәр: “Әһә, быларҙы туҡмаған кеүек, беҙҙе лә туҡмар”, – тип сәңгелдәккә яҡын килмәйҙәр.

Тиҙҙән бәпәй тыуыуына ҡырҡ көн дә булып китер. Мулла олатайҙы саҡырып, аҙан әйттереп, бәпескә ысын исем ҡуштырырбыҙ. Шуға тиклем беҙ күмәкләшеп уға исем уйлай торайыҡ.

1-се бала: Әйҙәгеҙ, Зәйнәп исемен ҡушайыҡ. Зәйнәп – ғәрәп исеме, таҙа тигәнде аңлата.

2-се бала: Хәтирә тип ҡушайыҡ исемде. Хәтирә – ғәрәпсә иҫтәлек тигәнде аңлата.

3-сө бала: Мәҙинә исеме лә бик матур бит. Мәҙинә – изге ҡала исеме.

4-се бала: Юҡ, Зәһира исеме матурыраҡ. Зәһира – ғәрәпсә нур сәсеүсе, бик матур тигәнде аңлата.

5-се бала: Айһылыу тип исем ҡушһаҡ, ай кеүек тулы йөҙлө һылыу булыр ине бәпес.

Кендек инәһе: Бик матур, мәғәнәле исемдәр әйттегеҙ. Балаға исем һайлағанда исемдең нимә аңлатҡанын белергә кәрәк. Сөнки һәр бер исем нимәнелер аңлата. Мәҫәлән, Зөһрә – йондоҙ исеме, Наилә – “бүләк” була, Ләйсән – яҙ көндәрендә яуған тәүге ямғыр. Беҙҙең әле ваҡытыбыҙ бар, баланың әсәһе менән атаһына исем һайларға ярҙам итербеҙ, йәме. Ә бәләкәсебеҙҙең йоҡоһо килде. Әйҙәгеҙ, күмәкләшеп бишек йырын йырлап, уны йоҡлатайыҡ.

*Кендек инәһе һәм балалар бишек йырын йырлайҙар.*

Кендек инәһе: Хәҙер шым ғына үҙебеҙҙең төркөмгә ҡайтайыҡ. Бала йоҡлаһын, ял итһен. Уны күрергә башҡа балалар ҙа килер.

**Быуындар бәйләнеше бишек йырҙарында**

(әсәй һәм өләсәйҙәр менән берлектәге эшмәкәрлек)

(мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн)

Бурыстар:

1. Балаларҙы бишек йыры төшөнсәһе менән таныштырыу, уларҙың кемгә бағышланғанын асыҡлау;

2. Бишек йырҙары аша балаларҙың психологик сәләмәтлеген нығытыу, бәйләнешле телмәр үҫтереү, аудитория алдында сығыш яһарға өйрәтеү;

3. Халыҡ тарихына һәм йолаларына, фольклорына ҡыҙыҡһыныу уятыу, халҡыбыҙға һәм өлкән быуынға ҡарата ихтирам тойғоһо тәрбиәләү.

**Дәрес барышы**

Сәхнәләштереү

*Бишек көйө яңғырай, урындыкта өләсәй кеше йөн иләп ултыра, әсәй ҡул тирмәнен тарта, ҡыҙ бала килеп инә, курсак тотҡан.*

Ҡыҙ:

Ятам-ятам тиҙерәк,
Төш күрергә күберәк,
Кем иң алдан өлгөрә,
Шул иң матурын күрә.

*Өләсәһе менән әсәһе уны йоҡларға һалалар.*

Өләсәй: Йоҡла, иркәм, йоҡла, бәпкәм!

Ҡыҙ: Мин бәпкә түгел!

Әсәй: Улайһа, йоҡлап ҡал, матурым, бүренән урланырһың!

Ҡыҙ: Ә бүре балаһын нисек йоҡлата икән?

Өләсәй (*йөн иләп ултыра, үҙе һөйләй*):

Беҙгә ҡурҡыныс булһа ла, балаларына бик наҙлы була бүреләр, балаһы ҙурайғансы, өңөнән сығармай, үҙе генә килтереп ашата, уларға бер кемде лә яҡын ебәрмәй. Балалары үҫкәнсе үҙе һаҡлай. Ә хәҙер йоҡла инде, иртәгә лә ҡыҙыҡ нәмәләр һөйләрмен.

Әсәй (*бишек йырын йырлай*):

Баш осонда әсәйең,
Һыйпай йомшаҡ сәскәйең,
Балам йоҡлап китһен, тип,
Тәмле төштәр күрһен, тип.
Бәлли-бәү, бәлли-бәү.

Тәрбиәсе: Балалар, әсәй ҡыҙына ниндәй йыр йырлап йоҡлатты? Бала ниндәй наҙлы йырға тынысланып йоҡлап китте?

Балалар: Бишек йырын йырланы.

Тәрбиәсе: Эйе, был бишек йыры тип атала.

*Ҡурай моңо яңғырай*

Тәрбиәсе: Борон башҡортта яҙылмаған шундай ҡанун булған: ир-егет һәм ҡыҙҙар ата-бабаһының кәмендә ете быуынын, ырыуының шәжәрә ебен, халҡының ҡобайырын, йыр-моңон белергә тейеш булған.

Бишек йырҙары ҙур тәрбиәүи көскә эйә. Баланың теле асылыуҙа, зиһенен уятыуҙа иң тәьҫирле тәрбиә сараһы ул – ишек йыры. Бала күңеленә әсә наҙы, өләсәйҙең аҡылы бишек йыры ярҙамында бирелһә, ғүмерлек була.

*Тәрбиәсе һөйләгән ваҡытта сәхнә күренеше үҙгәртелә: өләсәй йөн иләп ултыра, ҡыҙ уның эргәһендә ултыра, уларҙың янында һандыҡ тора.*

Ҡыҙ: Өләсәй, һандыҡты асып күрһәт әле, унда нимәләр һаҡлайһың?

*Өләсәй һандығынана яулыҡ сығара.*

Өләсәй: Был минең тылсымлы яулығым: өшөгәндә ябынһам, ул миңә йылылыҡ бирә. Ҡунаҡҡа барғанда ябынһам, матурлыҡ, һөйкөмлөк бирә. Бейергә төшкәндә ябынһам, дәрт һәм көс бирә.

Тәрбиәсе: Өләсәй, беҙ бындай яулыҡ менән тағы бер эш beләбеҙ: уйын уйнай алабыҙ.

*Балалар "Тирмә" уйынын уйнайҙар.*

Беҙ – күңелле, шат балалар,
Уйнайбыҙ ҙа бейейбеҙ,
Ҙур түңәрәккә йыйылып,
Матур тирмә яһайбыҙ.

Өләсәй: Һай афариндар! Балаҡайҙарым, был яулыҡтың тағы ла бер сере бар: уға элек-электән бәпәйҙе төрөп һалып йоҡлатыр булғандар.

*Өләсәй ҡурсаҡты төрөп күрһәтә, бишек йырын көйләй, бәүетә.*

Тәрбиәсе: Әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар менән уйын уйнап алайыҡ, яулыҡтарға ҡурсаҡтарҙы төрәйек.

*Ҡыҙҙар менән уйын "Бәпәйҙе төр"*

Тәрбиәсе: Бала бик тынысһыҙланһа, уны әсәһенең наҙлы йомшаҡ тауышы ғына тынысландыра ала. Уйынға әсәйҙәрҙе саҡырайыҡ. Улар беҙгә бишек йырҙарын йырлап күрһәтер.

*Әсәйҙәрҙең сығышы*

Тәрбиәсе: Беҙҙең әсәйҙәрҙең тауышы ниндәй матур, яғымлы! Шул тиклем матур йырлай улар. Уларға рәхмәт әйтәйек.

Ҡарға ла балаһына "аппағым", ти, терпе балаһына "йомшағым", тип һөйә, тиҙәр. Мин һеҙгә хайуандарҙың тормошо, балаларын нисек хәстәрләүҙәре тураһында һүрәтләмә күрһәтәм.

*Хайуандар һәм балалары тураһында фотоһүрәттәр ҡарау.*

Тәрбиәсе: Бишек көйөн тыңлағыҙ. Ул һеҙҙә ниндәй тойғолар уятыр? Бишек көйө ниндәй? (наҙлы, нескә, йомшаҡ, йоҡлата, тынысландырғыс).

*Аудиояҙма тыңлау. “Бишек көйө” яңғырай.*

Хәҙер бишек көйөн малайҙар музыка ҡоралдарында уйнап ҡарайҙар. Беҙҙең малайҙар оркестры.

*Аудиояҙмалағы “Сәңгелдәк” көйөнә малайҙар музыка ҡоралдары менән ҡушылып уйнайҙар.*

Панно эшләү.

*Ватманға (алдан ҙерләнгән) йондоҙҙар, ай һүрәте, болоттар, аттар, сабый һәм башҡа төндө һүрәтләгән һүрәттәр йәбештерелә.*

Тәрбиәсе: Ҡәҙерле ата-әсәләр, балаларығыҙға йышыраҡ бишек йырҙарын йырлағыҙ, сөнки унда ата-бабаларыбыҙҙың аҡылы һәм рухы тупланған, тормоштоң йәме һәм мәғәнәһе бирелгән. Бишек йырҙары аша балалар тирә-яҡ мөхитте танып беләләр. Өйрәтә лә, дауалай ҙа бишек йырҙары.

**_Сәитгәлина Г.М.,_**

*Аҫҡар ауылы "Теремок" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе*

## Милли кейем

(кескәйҙәр төркөмө өсөн)

Бурыстар:

1. Балаларҙы башҡорт милли кейеме, башҡорт фольклоры менән таныштырыу;
2. Һүҙлек байлығын яңы һүҙҙәр менән байытыу;
3. Тыуған илгә, телгә һөйөү тәрбиәләү, рәсем дәресенә ҡыҙыҡһыныу уятыу.

### Дәрес барышы

Тәрбиәсе: Кемдер ишек туҡылдата. Кем килгән икән? Айгөл менән Азамат килгән беҙгә ҡунаҡҡа. Улар һеҙҙе сәләмләй, әйҙәгеҙ бергәләп һаулыҡ һорашайыҡ.

Балалар, Айгөл менән Азаматтың кейемдәренә иғтибар итегеҙ. Ниндәй кейемдә килгән беҙҙең ҡунаҡтар?

*Балаларҙың яуаптары.*

Дөрөҫ. Бөгөн беҙ дәрестә башҡорт милли кейемдәре менән танышырбыҙ.

1-се бала:
Ынйы-мәрйен таҡҡан ҡыҙҙар,
Билбау быуған малайҙар
Милли кейем кейгәндәр,
Ихлас бейеп йөрөйҙәр.

*Балаларҙың сығышы, башҡорт милли кейемендә бейеү.*

Тәрбиәсе: Башҡорттарҙың милли кейемдәре – ул үҙе бер сәнғәт. Борон-борондан һәр башҡорт ҡатын-ҡыҙы кейем тегергә оҫта булған. Үҙенең һөнәрен ул ҡыҙҙарына тапшырған һәм шулай итеп быуындан-быуынға күсә килгән.

Кейем тегеү өсөн туҡыма, биҙәү әйберҙәрен дә үҙҙәре әҙерләгәндәр. Кесерткән, киндерҙән туҡыма һуҡҡандар. Кейемде сигеү, тәңкә, тимер элмәктәр, төҫлө таштар, муйынсаҡтар менән биҙәгәндәр.

Ҡатын-ҡыҙҙар кейеме бәләкәй саҡтан уҡ ҡыҙ баланы, күҙ тейеүҙән һаҡларға тейеш булған. Шуның өсөн кейемен тәңкә, суҡ, мәрйен менән биҙәгәндәр. Ҡыҙҙарҙың сәс биҙәүестәре бик күп төрлө булған, һәр яҡта үҙенсә аталған: елкәлек, сәсмау, сулпы. Ҡатын-ҡыҙҙар таҫмалы күлдәк, ҡыҫҡа камзул кейгәндәр.

Ирҙәр күлдәк-ыштан, өҫ яҡҡа камзул кейгәндәр. Кейемдәренең бер өҫтәмәһе булып билбау тора. Ул бәрхәттән, ебәктән тегелгән. Камзул өҫтөнән билбау быуғандар. Йәнлек (төлкө, бүре) тиреһенән тегелгән бүрек, кәпәс кейгәндәр.

*Ҡурсаҡтар Айгөл менән Азаматтың башҡорт милли кейемдәрен балалар менән анализлау.*

*Ял минуты*

Бер тиһәм – һикереп торам;
Икелә – ҡолас йәйәм;
Өс тигәндә, ҡул сабам;
Дүрт – бөйөргә таянам;
Биш тиһәм – тыпырлатып,
Һай, бейергә яратам!

Тәрбиәсе: Балалар, дөрөҫ итеп, арҡаларҙы тура тотоп ултырайыҡ. Айгөл менән Азаматҡа камзулдарҙы тәңкәләр менән биҙәп күрһәтәйек, һуҡ бармаҡтар менән камзулдыа төртөктәр йәки тәңкәләр менән биҙәп сығабыҙ.

*Практик эш: камзулды биҙәү*

Тәрбиәсе: Балалар, оҡшаймы һеҙгә тәңкәле камзулдар? Айгөл, Азамат, һеҙгә оҡшанымы беҙҙең балалар биҙәгән камзулдар?

Бөгөн дәрестә нимә белдегеҙ?

**Усманова Ф.С.,**
*Асҡар ауылы “Ҡайынҡай” балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе*

**“Быҙауға исем ҡушыу” йолаһы**
(мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн)

Бурыстар:

1. Халҡыбыҙ йолалары менән таныштырыу;
2. Бәйләнешле телмәр үҫтереү;
3. Балаларҙа кескәй саҡтан йорт хайуандарына ҡарата изгелек, миһырбанлыҡ тойғолары тәрбиәләү.

**Сара барышы**

*Сәхнә ауыл өйө күренешендә йыһазландырылған. "Ауыл көйө" яңғырай.*

Тәрбиәсе: Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле балалар, ҡунаҡтар! Бөгөн беҙҙең баҡсала ғәҙәти булмаған, әммә бик үҙенсәлекле сара – "Быҙауға исем ҡушыу" йолаһы. (*Әсәй инә. Ул-был эштәр менән булыша*)

Әсәй: Туҡалым иртәнән бирле ыҙылдап тик торҙо. Быҙау тыныуы килә ахры. (*Ҡыҙ менән малай йүгереп инә*)

Ҡыҙ:
Әсәй, әсәй, һөйөнсө!
Яңылығым беренсе:
Беҙҙең Туҡал һыйырҙан
Ап-аҡ быҙауҡай тыуған!
Әсәй:
Һөйөнсөгә уң ҡолағың, (*шаярты, малайҙың уң ҡолағын тарта*)
Һөйөнсөгә һул ҡолағың! (*ҡыҙҙың һул ҡолағын тарта*)
Ыуыҙ ғына һөтөнән
Ашатырмын ҡоймағын.
Һарай ҡотона иш булһын.
Дүрт һаны булһын һауһаҡ.
Быҙау булғас, хәҙер инде
Өҫтәл тулы булыр аҡ.

Ҡыҙ:
Әсәй, хәбәр итәйек барына:
Күршеләргә, дуҫтарға.
Күмәкләшеп йыйылып,
Исем ҡушайыҡ быҙауға.
Малай:
Мин инәйем Моратҡа,
Ул исем табыуға оҫта.
Дилбәргә лә әйтермен,
Ул да тилбер юҡ-барға.
*Балалар сығалар.*
Әсәй:
Балалар – дуҫтарында,
Исем эҙләү – уйҙарында.
Ыуыҙ ҡоймаҡ өлгөртәйем,
Шәнкәһен бешерәйем.

*Аш бүлмәһенән ҡоймаҡ, шәнкә сығара. Шаулашып бер төркөм балалар инә. Араларында Ағинәй ҙә бар.*

Ағинәй:
Һаумыһығыҙ, иҫәнмегеҙ!
Нисек көнитмешегеҙ?
Һарай тағы ҡотайған
Быҙау килтергән һыйырҙан.
Шыҡырланы һайыҫҡан:
Һеҙҙә ыуыҙ бар икән.
Әсәй:
Әлхәмдүлиллаһ шөкөр!
Теләгебеҙ берекһен!
Малым ҡото ишәйһен,
Ҡурабыҙҙа ерекһен.
Әйҙүк, түрҙән, ағинәй!
Өлкән ҡунаҡ булырһың,
Мал-тыуар именлегенә
Доғаларың ҡылырһың.
*Ағинәй балалар менән түргә уҙып ултыра, доға уҡый.*
Ҡыҙ:
Инәй, быҙау ҡуңыр төҫтәме?
Малай:

Ә тояғы бер иштәнме?
Ҡыҙ:
Ҡолаҡтары һалбырмы?
Малай:
Ә күҙҙәре һупаймы?
Ағинәй: (*көлә*)
Һай, балалар зирәктер,
Ата-әсәһенә терәктер.
Үҙҙәре ҡайһылай төпсөрҙәр.
Исем эҙләй белерҙәр.
Малай:
Тире кипкәс, атай беҙгә
Күрһәткәйне быҙауҙы.
Үҙе аҡ, күкһел тояҡ,
Тик ҡара бауыр аҫты.
Ҡунаҡ ҡыҙ:
Улай булғас, быҙауҙың
Исеме булһын Күктояҡ.
Малай:
Ә миңә оҡшай быҙауҙың
Ҡот килтергән булғанлығы.
Ҡыҙ:
Аҡкерпек әйҙә булһын!
Малай:
Маңлайында ҡашҡа булһа,
Әйҙә, булһын Аҡйондоҙ!
Әсәй:
Һай, һөймәлекле балалар! Исемдәрегеҙ матур. Ҡайһыһында туҡталайыҡ? Ниндәй исем ҡушайыҡ?
Балалар: (*бер тауыштан*)
Күктояҡ матур исем. Шуны ҡушайыҡ!
Ағинәй:
Афарин, балалар! (*һамаҡлай*)
Күктояҡ үҫеп етһен,
Бүтән малды иш итһен,
Хужаларын таныһын,
Ташламаһын ҡураһын,
Болонда уйнаҡлаһын,

Үлән етә ашаһын,
Һимеҙ мал булып торһон,
Утлығын ташламаһын.
Өс көн ыуыҙ ҡоймағын
Рәхәтләнеп ашағыҙ.
Артһын һеҙҙән ашығыҙ,
Етһен беҙгә ашығыҙ!

Рәхмәт, күршекәйем! Аҡтан өҙөлмә. Файҙаһын күр мал-тыуарыңдың.

Әсә:Ҡыуанысымдан онотоп торамсы. Мал зәкәтен бирәйем.

*Балаларға, Ағинәйгә бүләктәр тарата.*

Ағинәй: Әйҙәгеҙ, балалар күмәкләп исем ҡушҡан быҙауҙы күреп ҡайтайыҡ.

***Фәттәхова А.Г.,***
*Асҡар ауылы "Тирмәкәй" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе*

## Ирәндектең аҫыл таштары
(урта төркөм өсөн)

Бурыстар:

1. Балаларҙы тыуған еребеҙҙең байлығы – аҫыл таштары менән таныштырыу;
2. Таштар менән яңы уйын өйрәнеү;
3. Ошо байлыҡҡа ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, ғорурлыҡ тойғоһо уятыу.

### Шөғөл барышы

*Талғын ғына ҡурай моңо яңғырай. Тәрбиәсе балалар менән ултырышалар.*

Тәрбиәсе: Балалар, бөгөн беҙ Ирәндек тауы буйына экскурсияға барабыҙ. Ә унда нимәләр күрергә, ҡарарға була?

Балалар: Ағастар, үләндәр, таштар, йылғалар, хайуандар, ҡоштар.

Тәрбиәсе: Ә бөгөн беҙ таштар тураһында һөйләшәбеҙ. Таштарҙы ҡайҙа күрергә мөмкин?

Балалар: Юлда, урамда, тауҙа, йылға буйында.

Тәрбиәсе: Таштар нимә өсөн кәрәк тип уйлайһығыҙ?

Балалар: Йорттар, юлдар төҙөргә, биҙәүестәр эшләргә.

Тәрбиәсе: Эйе, таштарҙан күп нәмә эшләргә була икән. Бына, мәҫәлән, сәғәт, биҙәүестәр, ҡумта. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, көй аҫтында киттек Ирәндеккә (*ҡурай көйө уйнай*). Асығыҙ күҙҙәрегеҙҙе, ниндәй тауға килдек?

Балалар: Ирәндеккә!

Тәрбиәсе: Мин һеҙгә ошо тау тураһында әкиәт уҡығайным. Әйҙәгеҙ, бергәләп хәтергә төшөрәйек (*әҫәрҙең эстәлеген хәтергә төшөрөү*).

Ысынлап та, беҙҙең Ирәндек буйында файҙалы ҡыҙылмалар бик күп икән. Хәҙер уйын өйрәтәм һеҙгә. Ул "Бәхет ташы" тип атала.

*Уйын "Бәхет ташы"*

Бына ошо ваҡ таштар араһында берәүһе генә аҡ, ул бәхет ташы. Таштарҙы усҡа һалып, өҫкә һибеп ебәрәһең дә, усты тиҙ генә аҫҡа ҡаратып тотаһың. Таштар араһында аҡ таш булһа, изге, яҡшы теләк теләргә кәрәк. Мәҫәлән, әсәйем ауырымаһын йәки сәсем оҙон булып үҫһен. Уйынды башлайыҡ. (*ике-өс тапҡыр уйнау)*

Ирәндек тауы төрлө таштарға бай. Унда бигерәк тә йәшмә, мәрмәр күп. Һеҙҙең олатай-өләсәйҙәрегеҙ бәләкәй саҡта Ирәндек буйында алтын сығарғандар. Әле лә унда тәрән соҡорҙар бар, "шахта" тиҙәр, шунан алтын эҙләп сығарғандар. Ҡыҙыл йылғаһының теге ярында ауыл булған, шул ауылдан шахталарға йөрөп эшләгәндәр. Тимәк, беҙҙең Тал-Ҡусҡары эргәһендә алтын сығарғандар.

*Ирәндек хужабикәһе инә. Сюрприз моменты.*

Ирәндек хужабикәһе: Һаумыһығыҙ, балалар! Мин – Ирәндек тауының хужабикәһе. Минең тауымда бик матур таштар бар (*таштарҙы балаларға күрһәтә, исемдәре менән таныштыра, улар тураһында һөйләй*). Миндә алтын да бар, көмөш тә бар, уларҙан биҙәнеү әйберҙәре – алҡалар, балдаҡтар, хатта аҡсалар эшләйҙәр. Ирәндегемдә бигерәк тә йәшмә күпләп сығарыла. Уны эшкәрткәс, ошоноң кеүек таштар килеп сыға. Балалар, ул төҫлө таштарҙы һеҙ үҙегеҙ ҙә эшләй алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ әле, буяуҙар ярҙамында йәшмә ташын эшләп ҡарайыҡ. Бына ошо таштарҙы буяйбыҙ. Кипкәс, үҙегеҙ менән алып ҡайтырһығыҙ.

*Ҡурай моңо уйнатыла, балалар таштарҙы буяйҙар.*

Ирәндек хужабикәһе: Һай, афарин балалар, буяп та бөттөләр. Был минең һеҙгә бүләгем булыр.

Тәрбиәсе: Рәхмәт, Ирәндек хужабикәһе. Таштар кипкәнсе, "Аҡ таш" уйынын уйнап алайыҡ. Көтөүсе һайлана. Таш балаларҙың

береһенең усында. Көтөүсе ташты эҙләп табырға тейеш, тапмаһа – яза бирелә (*йырлай, бейей, шиғыр һөйләй*).

Тәрбиәсе: Балалар, Ирәндек хужабикәһенә рәхмәт әйтеп хушлашайыҡ. Ул һеҙгә бүләк бирҙе, ә беҙ уға йыр йырлайыҡ

“*Күк Ирәндек буйында” (Батыр Вәлит һүҙҙәре, халыҡ көйө)*

Күк Ирәндек буйында,
Ҡара ерҙең ҡуйынында,
Клеть юлдары.
Тәрән шахта эсендә,
Алтын йыуыу эшендә
Урал улдары.

Тәрбиәсе: Балалар, беҙ Ирәндек тауына экскурсияға барҙыҡ. Уның аҫыл таштары менән таныштыҡ. Тыуған яғыбыҙҙың байлыҡтары күп икән. Ул байлыҡтар беҙгә ата-бабаларҙан ҡалған, беҙ ҙә уларҙы үҙебеҙҙең киләсәк быуынға матур, теүәл еткерергә тейешбеҙ. Тәбиғәтте һаҡларға, уға зыян килтермәҫкә тейешбеҙ. Ә хәҙер баҡсабыҙға ҡайтайыҡ.


***Фәттәхова З.К.,***

*“Ҡайынҡай” балалар баксаһы тәрбиәсеһе*


**“Ҡар һыуына барыу” йолаһы**

1-се ҡыҙ.
Ағалар ҡар һыуҙары,
Баҫалар баҫыуҙары,
Йылғалар аша ярҙан,
Күләүек ҡала ҡарҙан.
2-се ҡыҙ.
Ҡарҙар иреп бөткәнсе,
Йәйге һиллек еткәнсе,
Яҙғы ташҡын үткәнсе,
Ҡар һыуына барайыҡ.
Алып барыусы.

Һаумыһығыҙ, балалар, ата-әсәләр, ҡар һыуына барыу йолаһына рәхим итегеҙ!

*Музыка уйнай. Оло инәй килеп инә.*

Оло инәй: Һаумыһығыҙ, балалар!

Алып барыусы: Һаумы, инәй! Әйҙә, рәхим итегеҙ, һике түренә ултырығыҙ. (*ултыра)*

Инәй (*доға ҡылып алғас*): Йә, балалар, оло байрамға – Яҙһылыу байрамына йыйылғанһығыҙ икән. Аллаға шөкөр, көндәребеҙ матур тора. Имен-аман ҡар һыуын алып ҡайтып, самауыр ҡуяйыҡ, яҙ ҡоймағы ҡояйыҡ.

Алып барыусы: Инәй, һөйлә әле, ни өсөн ҡар һыуына барғандар? Ҡайҙан килеп ингән йола был?

Инәй: Борон-борондан беҙҙең ырыу башҡорттары араһында тауға, ҡар һыуына барыу йолаһы булған. Һыуға март айында, бурандар тынып, ҡар ирей башлағас, барғандар.

Алып барыусы: Инәй, балалар бик ҡыҙыҡһыналар, ҡар һыуы ысынлап та файҙалымы?

Инәй: Борон, заводтар булмағас, төрлө химик матдәләр ҡулланмағас, ҡар һыуы бик таҙа булған шул! Һыу ала торған урынды ололар алдан билдәләгән. Һыуҙы алып ҡайтҡас, сәс, бит йыуған.

Алып барыусы: Хәҙер ни өсөн ҡар һыуына йөрөгәндәрен белдегеҙ. Кисә ағайҙарығыҙ ҡар һыуын алырға урынды билдәләнеләр, ҡыҙыл таҫма ҡуйҙылар. Малайҙар, һыу юлын тапай тороғоҙ.

*Малайҙар "Айыу һәм балалар" уйыны уйнайҙар. Уйындан һуң ултыралар.*

Алып барыусы: Ҡыҙҙар, юл тапалды, һыуға барырға ла була.

Инәй: Ярай, ҡыҙҙар, имен-аман ҡар һыуына юлланығыҙ, "бисмилла" әйтеп һыу алғанда имен яҙҙар юрағыҙ.

*Ҡыҙҙар башҡарыуында "Сирпәк менән бейеү".*

Инәй:

Иншалла, бәрәкалла,
Ҡар һыуҙарын алып ҡайтҡас,
Самауырҙар ҡуяйыҡ.
Күҙ теймәһен үҙебеҙгә,
Бит, ҡулдарҙы йыуайыҡ,
Бәхет-шатлыҡ юрайыҡ,
Иншалла, бәрәкалла!

Алып барыусы:

Бейегеҙ әле, малайҙар,
Бейегеҙ әле, ҡыҙҙар.
Үҙебеҙсә, саф башҡортса,
Йырлайыҡ әле йырҙар.

*Йыр "Гөрләүектәр"*

Алып барыусы: Самауырыбыҙ ҡайнап сыҡҡансы, балалар, уйын уйнап алайыҡ.

*"Нардуған" уйыны*

Инәй: Һай, афарин балалар. Бигерәк күҙәтеүсән икәнһегеҙ.

Алып барыусы: Инәй, беҙҙең балалар яҙ тураһында шиғырҙар ҙа ятлағандар.

1-се бала.
Яҙҙар килде,
Ҡояш көлә,
Бөтә йәнлек ҡыуана.
Ҡыҙҙар, ҡар һыуына сығып,
Күңел аса, йыуана.
2-се бала.
Ағас бөрөгә тулыша,
Ҡоштар ҡоралар оя,
Ярма ҡар ергә һырыша,
Ер инде һыуға туя.
3-сө бала.
Ҡояш апай сыҡ-сыҡ!
Сулпыларым суҡ-суҡ,
Ишектәрем туҡ-туҡ-туҡ.
Яуызлығым юҡ, юҡ, юҡ.

*Йыр "Яҙ килә"*

Алып барыусы: Инәй, балалар! Самауыр ҡайнаны, түргә ҡуйылды, хушлашырға ла ваҡыт етте. Ошоноң менән ҡар һыуына барыу йолаһы тамам. Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт! Һау булығыҙ!

***Харисова З.Д.,***
*Асҡар ауылы "Ҡайынҡай" балалар баҡсаһының өлкән тәрбиәсеһе*

## Юл япрағы
(әкиәт)

Бер ваҡыт һайыҫҡан урманда кемдеңдер сеңләп-сеңләп илағанын ишеткән. Ул, күп уйлап тормай, тауыш ишетелгән ергә осоп барып та

еткән. Һәм ни күрә: оҙон ҡолаҡ ҡуян түмәрҙә илап ултыра икән, бер аяғын ҡосаҡлаған, илап шешенеп бөткән.

Һайыҫҡан:

– Ни булды шеш ҡолаҡ, ниңә илайһың? – тип һораған.

Ҡуян:

– Осло ташҡа баҫып аяғымды яраланым, бик ауырта, – тип тағы ла нығыраҡ илай башлаған.

Һайыҫҡанға ҡуян бик йәл булып киткән, уйға батҡан: нисек итеп ҡуяндың хәлен еңеләйтергә икән.

– Илама инде, ҡуянҡай, урманда йәнлектәр, ҡоштар күп бит, һиңә ярҙам итеү сараһын бирәйһе беләләр. Мин айыуға барып киләйем, ул бик көслө, бәлки, ул беләләр дауыһын, – тип һайыҫҡан кәңәш һорарға айыуҙы эҙләп осоп киткән.

Айыу уйланып торғандан һуң былай тигән:

– Минең көслө булыуым ярҙам итмәҫ, бында аҡыл кәрәк, өкө ханым бик аҡыллы, ул белергә тейеш. Әйҙә, өкөгә барайыҡ.

Улар икәүләп өкөгә килгәндәр, хәлде аңлатып биргәндәр. Өкө ысынлап та бик аҡыллы кәңәш биргән:

– Ҡуяндың аяғындағы яраға юл япрағы бәйләргә кәрәк. Терпене эҙләп табығыҙ, ул юл япрағының ҡайҙа үҫкәнен һәм нисек ҡуллынырға кәрәклеген бик яҡшә белә, һеҙгә күрһәтер, – тип һайыҫҡан менән айыуҙы оҙатып ҡалған.

Терпе дарыу үләндәрен бик яҡшы белә икән. Ул юл япрағын өҙөп алып, ҡуяндың аяғындағы яраны бәйләп тә ҡуйған. Юл япрағы ярҙам иткән ҡуяндың яралы аяғына. Тиҙҙән оҙон ҡолаҡ йүгереп йөрөй ҙә башлаған, ти.

“Урманда” уйыны

Балалар түңәрәк буйлап йөрөйҙәр, шиғырҙың һүҙҙәренә ярашлы хәрәкәттәр яһайҙар.

Беҙ йыйылдыҡ уйынға,
Матур йәшел болонға.
Айыуҙар ҙа бар бында (*айыу булып атлайҙар*),
Бүреләр ҙә бар бында (*бүре булып атлайҙар*),
Төлкөләр ҙә бар бында (*төлкө булып атлайҙар*),
Ҡуяндар ҙа бар бында (*ҡуян булып һикерәләр*).
Бигерәк күңелле беҙгә! (“*сәпәкәй” итеп тыпырҙашып бейеп ҡуялар*).

***Әҙелгилдина А.А.,***
*Асҡар ауылы «Сулпылар» балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе*

**Зөлхизә инәйҙә ҡунаҡта**

(Башҡорт халҡының милли ашы – ҡорот)

(урта төркөм өсөн)

Бурыстар:

1. Балаларҙы башҡорт халҡының милли ашы – ҡорот, уны эшләү ысулдары менән таныштырыу;
2. Балаларҙың иғтибарлылығын, бәйләнешле телмәрен үҫтереү;
3. Башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәренә, милли аш-һыуҙарға ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Белем биреү эшмәкәрлеге барышы**

Тәрбиәсе: Һаумыһығыҙ, балалар!

Балалар: Һаумыһығыҙ!

Тәрбиәсе: Беҙ бөгөн, балалар, ҡунаҡҡа барабыҙ. Юлға сығыр алдынан телебеҙгә гимнастика эшләп алайыҡ. Тел төҙәткестәрҙе ҡабатлайыҡ.

Тәрбиәсе: Балалар, беҙҙе бөгөн Зөлхизә инәй ҡунаҡҡа саҡырҙы. Нимә менән барыу уңайлы булыр? (*балаларҙың яуаптары*)

Тәрбиәсе: Әйҙәгеҙ, ат менән барайыҡ!

Сабабыҙ беҙ, сабабыҙ,

Беҙ ҡунаҡҡа барабыҙ (*атта сабыу хәрәкәте эшләү*).

Аттар ҡасты яланға,

Үлән һутлы булғанға (*бармаҡтарҙы тоташтырып, ҡулдарҙы һуҙырға, кәүҙәне алға бөгөргә*).

Ә бына тора ҡоҙоҡ,

Һыуы тәмле һәм һыуыҡ (*туҡтайҙар*).

Тәрбиәсе: Бына, балалар, килеп тә еттек. Ә Зөлхизә инәй ҡайҙа икән? (*Саҡыра*). Мин уны эҙләп киләйем әле, ә һеҙ шым ғына ултырып тороғоҙ.

*Тәрбиәсе камзул кейеп, яулыҡ ябынып сыға.*

Зөлхизә инәй: Һаумыһығыҙ, балаҡайҙар! Нисек килеп еттегеҙ?

Балалар: Һаумыһығыҙ, инәй! Һәйбәт килеп еттек.

Зөлхизә инәй: Ҡайһылай уңайлы ғына килеп еттегеҙ, самауырым да әҙер. Ҡунаҡ киләһә, тип, төрлө ризыҡтар әҙерләгәйнем. Ниндәй ризыҡ икәнлеген йомаҡтарҙы сисһәгеҙ генә белерһегеҙ.

*Һөт аҙығы һүрәттәре күрһәтелә.*

1. Аҡ шишмәнән тамсы булып тама,

Һауытҡа ҡойһам – ҡуйы булып ҡала. (*ҡатыҡ*)

2. Бәләкәй генә йомроҡайҙың мине туҡландырғыһы килә. Уны иҙгәндәр, һыҡҡандар, ваҡыт биргәндәр – киптерергә ҡуйғандар. (*корот*)

3. Була ҡыҙыл, була аҡ.

Балалар уны бигерәк ярата.

Уның менән аҙыҡланһа,

Һөйәк-тештәре ныҡ була. (*эремсек*)

4. Һәүкәш ҡайтҡас көтөүҙән,

Әсәй сепарат айыртҡан.

Килеп сыҡты тәмле аҙыҡ.

Уның исеме ….(*каймаҡ*)

5. Кеше икмәккә һылай.

Унһыҙ хатта табын ҡормай.

Бутҡа өҫтөндә ялтырай.

Ул – һап-һары ғына …..(*май*)

6. Алма тиһәң, алма түгел,

Ҡыяр тиһәң – түңәрәк.

Бик ҡәҙерләп кенә телеп,

Ашъяулыҡҡа һалалар,

Өҫтәлдәге иң бөйөк аш.

Был ни була, балалар? (*икмәк*)

Зөлхизә инәй: Афарин, балалар, бик отҡорһоғоҙ! “Аҡ ҡалас” уйынын уйнап алайыҡ.

“Аҡ ҡалас” уйыны

*Балалар түңәрәккә баҫа. Берәүһе – уртала.*

Айгөлдөң тыуған көнөнә

Бешерҙек беҙ аҡ ҡалас;

Бына шулай ул тәпәштән (*сүкәйеп, ҡулдарын аҫка төшөрәләр*)

Бына шулай бейектән, (*ҡулдарын өҫкә күтәрәләр*)

Бына шулай тарлығы, (*ҡулдарын һуҙып, урталағы балаға яҡынаялар*)

Бына шундай киңлеге, (*ҡулдарын ян-яҡҡа йәйәләр*)

Аҡ ҡалас, аҡ ҡалас,

Теләгәнеңде һайлап ҡас.

*Урталағы бала үҙе урынына берәүҙе һайлап сығара ла үҙе түңәрәктәгеләргә ҡушыла һәм уйын-йыр шулай дауам итә.*

Зөлхизә инәй: Балалар, урындарығыҙға ултырығыҙ. Ошо ризыҡтарҙың араһынан минең иң ятаҡан ризығым – ҡорот. Уның нимәнән эшләнгәнен беләһегеҙме? (*короттоң һүрәтен күрһәтә*) Ҡорот ниндәй төҫтә? Нисек эшләнә икән ул? (*балаларҙың яуаптары*) Әйҙәгеҙ, бергәләп ҡарайыҡ. Был ризыҡ нисек һәм нимәнән әҙерләнә икән?

*"Ҡорот эшләү" презентацияһы*

Зөлхизә инәй: Ҡорот әҙерләү өсөн беҙгә нимә кәрәк?

Балалар: Һөт кәрәк.

Зөлхизә инәй: Әлбиттә, һөт. Сөнки һөт аҙыҡтары туҡлыҡлы, витаминдарға ла бик бай. Ҡорот эшләр алдынан ҡатыҡ эшләйҙәр. Ҡатыҡ – башҡорттарҙың киң файҙаланылған һәм яратып ҡабул ителгән хөрмәтле ризығы.

Ул былай әҙерләнә:

1) һөттө талғын утта ҡайнатырға;

2) ҡайнап сыҡҡас, һыуытырға ҡуйырға;

3) яңы һауылған һөт кимәленә еткәс, ойотко һалырға һәм йылы урынға ултыртырға;

4) ойоп сыҡҡас та, өҫкә ҡалҡҡан һыуын бер аҙ алып, һалҡынға ҡуйырға.

Ҡатыҡ – көндәлек ризыҡ. Уны оҙаҡ һаҡлап булмай, 2-3 көндән ул әсей, күпсей башлай. Күпереп әсегән ҡатыҡ (эркет) – йәнә бер ҡәҙерле һәм ҡиммәтле ризыҡ. Ул ҡорот яһау өсөн ҡулланыла. Ул былай әҙерләнә: эркетте талғын ғына утта ҡайнатырға. Төйөрһөҙ генә ҡайнатып алғандан һуң, һыуытырға ултыртырға һәм һыуынып сыҡҡас, киндер йәки таҫтамалдан тегелгән тоҡҡа ауҙарырға. Ике көн һарҡҡас, ҡоротто тоҡтан алып, ҙур табаҡҡа бушатырға һәм баҫырға Оҙаҡ һаҡларға йәки ашка һалырға кәрәк булһа, тоҙ һалып баҫырға кәрәк. Баҫҡас, йомғаҡҡа әүәләргә лә киптерергә.

Зөлхизә инәй: Балалар, мин нисек ҡорот эшләргә кәрәген күрһәттем. Хәҙер һеҙ һөйләп күрһәтегеҙ.

*Мнемотаблица менән эш. (3-4 баланан һөйләтеү)*

Ҡатыҡ ҡойҙоҡ ҡаҙанға,
Ҡатыҡ ҡайнай ҡаҙанда.
Тап-таҙа тоҡка ҡойҙоҡ,
Ҡоротто теҙеп ҡуйҙыҡ.

Зөлхизә инәй: Бына бергәләп ҡорот әҙерләргә өйрәндек.

*Тәрбиәсе балаларға ҡорот күрһәтә.*

Рәсимә Ураҡсинаның “Ҡатыҡ” шиғырын тыңлау. (*тәрбиәсе уҡый*)

Ойом-ойом, ойомос,
Ҡатыҡ булды ойомос.
Тәмле ҡатыҡ тамаҡҡа,
Бейеп киттем таҡмаҡҡа.
Ҡатыҡ ҡаймаҡ ярата,
Ҡаймаҡ ҡатыҡҡа бата.
Ҡалаҡ ҡатыҡ ашата,
Ҡаймаҡ ҡалаҡ ярата.
Ҡатыҡ эстем ҡалаҡлап,
Ҡатыҡ эстем ҡаймаҡлап.
Күңелем көр, ҡыуанам,
Бейеп торам уйнаҡлап.

Зөлхизә инәй: Ҡорот эшләнек, шиғыр менән нығыттыҡ. Эш бөткәс, уйнарға ярай, тигән боронғолар. «Тирмә» уйынын уйнап алайыҡ.

*“Тирмә” уйыны*

Зөлхизә инәй: Миңә ҡунаҡҡа килгәнегеҙгә рәхмәт, балалар! Һеҙгә балалар баҡсаһына ҡайтырға ла ваҡыт етте. Башҡорт йолаһы буйынса ҡунаҡтарҙы күстәнәс менән оҙаталар. Бына һеҙгә күстәнәс. Һау булығыҙ!

*Тәрбиәсе, икенсе бүлмәгә сығып, яулығын һәм алъяпҡысын сисә.*

Тәрбиәсе: Зөлхизә инәй йорт мәшәҡәттәре менән булыша. Ә беҙ аттарға атланып, ҡайтыу яғына юлланайыҡ. Минең арттан ҡабатлағыҙ:

Сабабыҙ беҙ, сабабыҙ,
Баҡсабыҙға ҡайтабыҙ. (*Атта сабыу хәрәкәте эшләйҙәр*)

Тәрбиәсе: Балалар, һеҙ бөгөн нимә белдегеҙ? Ниндәй уйындар уйнанығыҙ?

***Әхмәтйәнова Г.Н.,***
*Амангилде ауылы балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе*
(мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн)

**Ҡаҙ өмәһе**

Ҡыҙҙар: Һаумыһығыҙ, өләсәй! Өмә мөбәрәк булһын!

Өләсәй: Һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар! Әйҙәгеҙ, үтегеҙ! Һеҙҙең ярҙам бик кәрәк. Хәҙер ҡаҙҙарҙы егеттәр салып индереп торорҙар, беҙ йолҡорбоҙ.

*Ҡыҙҙар ярым түңәрәк яһап ултырғыстарға ултыралар, һәр береһенең ҡулында ҡаҙ, улар "йолҡа" башлайҙар.*

Тәрбиәсе: Балаларға ҡаҙҙың файҙаһын һөйләһәгеҙ ине, өләсәй.

Өләсәй: Борон-борондан ата-бабалар ҡаҙ көтөргә яратҡандар, сөнки унан бик күп файҙа күргәндәр: мамығынан мендәр, яҫтыҡтар, түшәктәр эшләгәндәр, ә итенән, майынан төрлө-төрлө ризыҡтар бешергәндәр. Хатта борон, һыуытҡыс булмаған саҡта, ҡаҙ итен ҡаҡлап һаҡлағандар, иң ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы ҡаҡланған ҡаҙ ите менән һыйлағандар, ә ҡышҡы һыуыҡтарҙа ҡаҙ майы менән ҡул, биттәрен, ҡолаҡ остарын ыуғандар, сөнки ҡаҙ майы һыуыҡтан һаҡлаған. Әйҙәгеҙ, малайҙар, ҡыҙҙар ҡаҙ йолҡҡансы, беҙ йомаҡтар ҡойоп, һанашмаҡтар әйтеп алайыҡ.

Ҡыт-ҡыт-ҡыт итә,
Килгәнебеҙҙе көтә.
Йомортҡаны алығыҙ, – тип,
Ул беҙгә хәбәр әйтә. (тауыҡ)
Башы тараҡ,
Ҡойроғо ураҡ. (әтәс)
Аҡ ҡанат, пар ҡанат,
Ҡаңҡы-ҡаңҡы ҡаҡ ҡанат. (ҡаҙ)
Оса лап-лоп, төшә лап-лоп,
Йөҙә шәп-шәп, йөрөй саҡ-саҡ. (өйрәк)

Өләсәй: Ҡайһылай отҡор, шәпһегеҙ, малайҙар! Мәҡәл, әйтемдәрҙе беләһегеҙме?

*Малайҙар мәҡәлдәр, әйтемдәр әйтә.*

Кем эшләмәй, шул ашамай.
Себеште көҙ һанайҙар.
Һүҙ менән түгел, эш менән күрһәт.

Кешене тун йылытмай, кешене эш йылыта.
Эшләһәң – май ҡабырһың,
Эшләмәһәң – буш тәрилкә яларһың.
Өләсәй: Бик уңғандар, үҙҙәре бик тапҡырҙар.
*Көй яңғырай.*
Малай: Малайҙар, ҡыҙҙарҙы бейеүгә саҡырайыҡ!
Тәрбиәсе: Эйе шул, күңел асып алайыҡ.

*Бейеү "Гөлнәзирә"*

Ҡыҙ: Ҡыҙҙар, малайҙар, уйын уйнап алайыҡ!

*Уйын "Йәшерәм яулыҡ"*

Өләсәй: Ҡыҙҙар, уйын уйнап, ҡаҙҙарҙы оноттоғоҙ. Шшишмәгә барып ҡаҙҙарҙы һыуҙа сайҡатып алып ҡайтырға кәрәк. Йә, малайҙар, ҡаурыйҙарҙы алығыҙ ҙа йылғаға еткәнсе һибеп барығыҙ.

Малай: Ни өсөн шулай эшләргә кәрәк?

Өләсәй: Киләһе йылда ла ҡаҙҙар уңһын өсөн "Ҡаҙҙар уңһың, йәй теүәл йөрөһөн, эт-ҡортҡа юлыҡмаһын" тип теләктәр теләйҙәр.

*Малайҙар, ҡыҙҙар көйәнтәләргә ҡаҙҙар эләләр, сиrange*

*Малайҙар, ҡыҙҙар көйәнтәләргә ҡаҙҙар эләләр, силәктәргә ҡаҙ ҡанаттарын тултырып сығалар. Ҡыҙҙар һыу буйынан ҡайтып киләләр.*

Тәрбиәсе:
Ҡыҙҙар ҡайта ҡаҙҙар йыуып,
Таҙа һыулы инештән.
Балдаҡтары, ҡул бауҙары
Алтындан да көмөштән.

Ҡыҙҙар: Өләсәй, ҡаҙҙарҙы йыуып, шифалы шишмә һыуында сайып ҡайттыҡ, ҡаҙҙарығыҙҙы ҡабул итегеҙ.

*Өләсәй ҡаҙҙарҙы ҡарай-ҡарай балаларҙы маҡтай.*

Өләсәй:
Бик матур булған! Күңелдәрҙе дәртләндереп уйын уйнап алайыҡ.

*Дәртле көйгә бейеп йырлайҙар.*

Ҡаҙ өмәһе бөтөп килә,
Барыһына күңелле.
Киләһе йыл шулай,
Өмәләр матур уҙһын.

Эйе, шул, эйе шул,
Өмәләр матур уҙһын.
Йырланыҡ та, бейенек тә,
Өмәһен дә үткәрҙек!

Тәрбиәсе:
Беҙҙең бурыс – боронғо ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы һаҡлау.

## Кескәй балалар өсөн йырҙар

*Аҫҡар ауылы “Сулпылар” балалар баҡсаһы*
*музыка етәксеһе Ибраһимова Л.А.,*
*тәрбиәселәре Баймырҙина В.Ә., Сафина Г.М. тәржемәһе*

**Әтәскәй**

Һин алтын тараҡлы,
Әтәскәй, әтәскәй!
Майланған кеүек башың,
Һаҡалың ебәктәй.

Бик иртә тораһың,
Бик ҡысҡырып йырлайһың,
Баланы уятаһың!

**Сәпәкәй**

Сәпәкәй-сәпәкәй
–Ҡайҙа булдың? – Өләсәйҙә.
– Ашаның? – Бутҡа.
– Ни эстең? – Буҙа.

Бутҡа ашаныҡ,
Остоҡ та киттек,
Болотҡа ла еттек,
Ағастарға ҡундыҡ,
Ял итеп ултырҙыҡ.

**Көҙ**

Көҙгө һалҡын елкәй
Эй, иҫә өйрөлә.
Ағастан япраҡтар
Өҙөлә, өҙөлә.

Елбер-елбер елдә
Оса һары япраҡ.
Һап-һары балаҫтай
Беҙ йөрөгән һуҡмаҡ.

**Ҡыш килде**

Ҡар яуа, ҡар яуа.
Юлдар ҡарға күмелгән
Беҙгә аҡ ҡыш килгән,
Ҡыш килгән.

**Ҡыш бабай**

Ҡыш Бабай, Ҡыш Бабай,
Шыршыһын алып килгән,
Ялтыр уйынсыҡтарын
Һәм алтын шарын элгән.

**Шуҡ Бабай**

Ҡыш бабай беҙгә килгән,
Ҡыш бабай, Ҡыш бабай.
Танауын өҫкә сөйгән,
Шуҡ Ҡыш бабай!

Аҡ ҡарға сумған урман,
Шатлана шуҡ ҡуян,
Аҡ тунын кейеп алған
Беҙҙең ҡуян.

Ҡуянды ҡыуған айыу,
Байрамда шаяртып.
Йәнлектәр ҡарап тора,
Эй, яратып.

Ҡупшы төлкө һыланып,
Һыйпанып, ҡыланып,
Урман буйлап йөрөй, ти,
Эй, шатланып.

Ҡыш бабай килеп инде,
Байрам бик йәмләнде,
Балалар менән бейеп,
Эй, әйләнде.

**Тып-тып-тып**

Ҡояш йылмая.
Яҙ килә бар донъяға:
Тып-тып тамсы тама,
Ҡоштар ҡайта ояға.

Сырҡ-сырҡ-сырҡ итеп,
Турғайҙар йыр йырлайҙар.
Күңелләнеп осоп,
Ем эҙләп туймайҙар.

**Бәлеш**

Тәмле бәлеш бешерәм,
Ашағыҙ, бәләкәстәр.
Әсәкәйем, мин һиңә
Бешерҙем бәрәмәстәр.

Тәмләп сәй эс, әсәйем,
Дуҫтарҙы ла һыйлайым.
Эҫе бәрәмәс, бәлеш
Өҫтәлемә ҡуяйым.

**Төлкө һәм ҡуяндар**

Урман аҡланында
Йүгерә ҡуяндар.
Вәт шулай (шундай) ҡуяндар
Йүгерек ҡуяндар.

Түңәрәктә ҡуяндар
Соҡойҙар ерҙән тамыр.
Бына шулай (шундай) ҡуяндар
Йүгерек ҡуяндар.

Килеп сыҡты төлкө,
Ерән тунын кейеп.
Ҡайҙа һуң ҡуяндар,
Йүгерек ҡуяндар?

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

*Баймөхәмәтова Л.Р.* Орсоҡ өмәһе........................................................4
*Баймөхәмәтова Л.Р.* Аждаһалар иле (легенда).....................................6
*Баймырҙина В.Ә.* Айтуған менән Ҡырмай (әкиәт) ...............................9
*Ғәбитова М.Н., Хәмидуллина Р.Ә.* “Кейеҙҙән хәситә” проекты..........11
*Ғәбитова М.Н., Хәмидуллина Р.Ә.* “Яландағы сәскәләр” проекты....13
*Зәйнишева Д.Р.* Өләсәйем һандығы....................................................15
*Йомағужина А.С.* “Ҡарғатуй” байрамы. ............................................20
*Йәнбирҙина И.Б.* Кейеҙ баҫыу .............................................................24
*Махийәнова Р.С.* Һыйлы көнөң – һыйырҙа .........................................27
Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы – ҡурай............................29
Аһылай (Өскүл) ауылы тирәһендәге ер-һыу атамалары......................31
*Мелекесова Е.В.* Кәкүк сәйе...................................................................33
*Мөхәмәтшина А.И.* Башҡорт халҡының музыка ҡоралы – ҡумыҙ.....36
Мин мәргән..............................................................................................38
*Мәғәфүрова А.Х.* Әбйәлил районы Аҫҡар ауылы һәм уның тирә-
яғындағы ер-һыу атамалары ..................................................................42
*Өмөтбаева Г.Р.* “Ҡырҡ таш” уйыны.......................................................45
*Рәхмәтуллина Л.Ғ.* Бишек йыры.............................................................46
*Сафина Г.М.* Ыуыҙ ҡоймағы менән һыйлау йолаһы............................49
Бәпес үҫтереү йолаһы.............................................................................51
Быуындар бәйләнеше бишек йырҙарында...........................................55
*Сәитғәлина Г.М.* Милли кейем.. ..........................................................58
*Усманова Ф.С.* “Быҙауға исем ҡушыу” йолаһы...................................60
*Фәттәхова А.Г.* Ирәндектең аҫыл таштары..........................................63
*Фәттәхова З.К.* “Ҡар һыуына барыу” йолаһы.....................................65
*Харисова З.Д.* Юл япрағы (әкиәт) .........................................................67
“Урманда” уйыны. ..................................................................................68
*Әҙелгилдина А.А.* Зөлхизә инәйҙә ҡунаҡта (Башҡорт халҡының
милли ашы – ҡорот)..................................................................................69
*Әхмәтйәнова Г.Н.* Ҡаҙ өмәһе..................................................................73
*Ибраһимова Л.А., Баймырҙина В.Ә., Сафина Г.М.* Кескәй балалар
өсөн йырҙар.............................................................................................75

*Учебно-методическое пособие*

Давлеткулова Гульфия Шафкатовна
Хусаинова Ляйля Мидхатовна

**МОЙ КРАЙ РОДНОЙ – АБЗЕЛИЛ**

Разработки мероприятий,
апробированных воспитателями в детских садах
Абзелиловского района

*(на башкирском языке)*

*Материалы публикуются в авторской редакции*

450008, г. Уфа, ул. Октябрьской революции, 3а